**Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына! 15 – 30 майҙа "Киске Өфө" гәзитенә ташламалы хаҡ менән яҙылып була: 50665 индекслы баҫмабыҙ ошо 15 көн арауығында алты айға 471 һум 72 тин, 50673 индекслыһы (юридик шәхестәр өсөн) 477 һум 72 тин тәшкил итәсәк. Июнгә ҡалдырмай, яратҡан баҫмағыҙға яҙылып ҡуйһағыҙ, оторһоғоҙ.**

*(Гәзиткә яҙылыуҙың башҡа юлдары тураһында 2-се биттә уҡығыҙ).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17 - 23 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№20 (594)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аҡ халатлылар менән дә...**
уртаҡ тел табыуҙары бик ҡыйын



3

**Башҡорт телендә һөйләшеуҙән,**
башҡорт булыуыңдан оялма!



5-6

**Ниндәй һөнәр һайларға?**



8-9 Халҡыңа файҙа килтерерлеген!

**Халҡыбыҙ йолаларын...**
дөрөҫ итеп атҡарайыҡ!



12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Матбуғат азатлығы" төшөнсәһен нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?

***Алик ШАКИРОВ, "Башинформ" агентлығы мөхәррире урынбаҫары, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге республика Хөкүмәте премияһы лауреаты:*** Бөтә донъя матбуғат азатлығы көнө ҡыйыу, хаҡлыҡ яҡлап, енәйәтсел даирәләрҙең ҡырын эштәрен фашлаған мәҡәләләре өсөн һәләк булған Артем Боровик, Дмитрий Холодов, Юрий Щекочихин кеүек журналистарҙың ғүмерҙәре ҡыйылған шанлы 90-сы йылдарҙа булдырылғайны. Хәҡиҡәти һүҙҙәре өсөн һәләк булған Рәсәй журналистары исемлеген тағы ла әллә күпме дауам итергә булыр ине. Ул саҡтарҙа бындай хәл бик көнүҙәк булып, Матбуғат азатлығы көнөн булдырыу үҙен аҡлай ине. Ләкин бөгөн, бер төрлө генә булмаған болғансыҡ заманда, мин был датаны шулай уҡ бер төрлө генә итеп ҡабул итә алмайым. Ҡарағыҙ әле: Украина матбуғат баҫмалары илдең көньяҡ-көнсығышындағы хәлдәрҙе яҡтыртыуҙа ниҙәр генә ҡыланмай! Ә көнбайыш матбуғат саралары был хаҡта ниҙәр генә яҙмай! Ҡыҫҡаһы, бөгөн бәғзе берәүҙәр һүҙ һәм матбуғат азатлығын - сама белмәү, ни теләйһең - шуны яҙыу тип аңлай башланы. Үкенескә күрә, бөгөн һүҙ һәм матбуғат азатлығы тигән булып, теге йәки был сәйәси көстәр мәнфәғәтендә халыҡтарҙы ысын мәғәнәһендә һәм оятһыҙ рәүештә алдау, "төп башына ултыртыу" эшмәкәрлеге алып барыла.

Ә инде матбуғат ирке тураһында ижтимағи-сәйәси планда түгел, ә һөнәр булараҡ һүҙ алып барғанда, минең өсөн матбуғат азатлығы - ул беренсе сиратта уҡыусылар алдында яуаплылыҡ тойғоһо. Журналистикала 40 йылдан ашыу эш дәүеремдең байтаҡ өлөшө совет осорона тап килде. Хәҙер был осорҙо, йәғни үткән быуаттың 70-80-се йылдарын, бер ниндәй һүҙ ирке булманы, Главлит - Матбуғатта сер һаҡлау буйынса дәүләт комитеты йөҙөндә аяуһыҙ цензура хакимлыҡ итте, тип ҡара яғырға маташалар. Ләкин был улай түгел. 1974 - 1984 йылдарҙа мин "Ленинец" йәштәр гәзитендә эшләнем - беҙҙә бер кем тыйманы, беҙ теләгән темаға (дәүләт серҙәрен һатмаған, әлбиттә) мәҡәләләр яҙа ала инек. Әйткәндәй, беҙҙең, совет журналистарының, үҙебеҙҙең намыҫ, эске цензура бар ине. Тап шул нәмәнең бөгөнгө журналистарға бик ныҡ етешмәүе һиҙелә лә инде. Беҙ журналистиканың "Зыян ҡылма!" тигән төп принцибына тоғролоҡ һаҡланыҡ. Хәҙер иһә был принцип менән эшләүселәр һирәк күренә, уның ҡарауы "Бөтәһе лә һатыла!" тигән девиз өҫтөнлөк алды...

***Азамат ҒӘЛЛӘМОВ, БДУ доценты, журналистика кафедраһы мөдире вазифаһын башҡарыусы:*** Демократияның нигеҙен тәшкил итеүсе һәм туранан-тура бик күп кешенең тормошонда, хатта яҙмышында ҙур роль уйнаусы һүҙ һәм фекер азатлығының мөһимлеге Кеше хоҡуҡтарының дөйөм декларацияһы менән нығытылған. Киң мәғлүмәт сараларының бойондороҡһоҙлоғо, асылда, ни бары ике төп төшөнсәнән тора, тип фараз итәм: объективлыҡ һәм ғәҙел ҡараш. Әммә тап бына шуға өлгәшеүе барыһына ҡарағанда ла ҡыйыныраҡ та инде. Журналистар һәм киң мәғлүмәт саралары алдында үҙ урыныңды, үҙ уҡыусыңды һәм тамашасыңды, ә иң мөһиме - үҙ темаңды табыу бурысы тора. Һәм шул уҡ ваҡытта, әлеге әйткәнсә, һәр нәмәгә аудиторияң күҙләгәнән түгел, бәлки, ғәҙел һәм объектив мөнәсәбәттә ҡалыу кәрәк. Ә, ғөмүмән, бармы ул матбуғат азатлығы , тигән һорауҙың ни бары өлөшләтә хәҡиҡәт булыуын да һыҙыҡ өҫтөнә алыр инем. Был, ни тиһәң дә, йәмғиәт үҫешенең баҫҡыстарын билдәләүсе этаптар булараҡ күҙ алдына баҫа: I -матбуғат иреклеге, II - демократия, III - граждандар йәмғиәте һ.б. Рәсәйҙә, бөтәбеҙгә лә мәғлүм булыуынса, үткән быуаттың 90-сы йылдарында матбуғат азатлығы булып алды, ләкин ысынында демократия булманы. Аңлашылыуынса, һүҙ һәм матбуғат азатлығы айырым бер ниндәйҙер илдә ысын мәғәнәһендә демократик йәмғиәт төҙөү һәм граждандлыҡ әүҙемлеген күтәреү маҡсаттарында хәл иткес әһәмиәткә эйә төшөнсә улар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# УЛ БЕҘГӘ ТӘҮСЫҒАНАҠ КЕҮЕК

**"Киске Өфө" гәзите бүтән киң мәғлүмәт сараларынан үҙ аллы фекер йөрөтөүе менән айырылып тора. "Үҙ аллы" тигәне башҡорт милләтенең рухын күтәреү өсөн башҡарған эшенә ҡайтып ҡала. Милләткә, телгә, әҙәбиәткә һәм мәҙәниәткә ҡағылышлы актуаль проблемаларҙы күтәргән, халыҡтың бөгөнгөһө менән ҡыҙыҡһынған, шул уҡ ваҡытта уның тарихына ла мөрәжәғәт иткән, киләсәккә лә ҙур маҡсаттар ҡуйған гәзиттәрҙең береһе, тип беләбеҙ "Киске Өфө"нө.**

БДУ им. М. АКМУЛЛЫ



Филология факультеты уҡытыусылары.

✓ Торатауҙы ватмай, емермәй ҙә сеймал алыуҙың башҡа юлдарын табырға була бит. Ә инде "Сода" компанияһының "Вестник" гәзите материалдарын уҡыһаң, сәстәр үрә тора: улар тәбиғәт ҡомарҡыһын фәҡәт емереү яғын ғына ҡайыра.



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Матбуғат азатлығы" төшөнсәһен нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Гөлнур ДӘҮЛӘТЙӘРОВА, Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм районының "Ашҡаҙар" гәзите баш мөхәррире:*** Матбуғат азатлығы тип әйтәбеҙ ҙә бит, ләкин ысынында ул тормошобоҙҙа ниндәйҙер кимәлдә урын алған хәлдә лә бик сикләнгән. Фекер, әйтер һүҙҙәр күп ул, ләкин беҙгә уларҙы уйыбыҙҙағыса ҡыйыу итеп тура ярып һалырға мөмкинлек юҡ. Шуға күрә лә гәзит-журналдарыбыҙ материалдары бер төрләрәк ҡалыпҡа һалынып донъя күрә, уҡыусы өсөн уларҙың ҡыҙығы ла юҡ. Әйткәндәй, ошо хаҡта гәзит уҡыусыларҙан да үпкә һүҙҙәре ишетергә тура килгеләй: ниңә тураһын әйтеп, дөрөҫөн яҙмайһығыҙ, кемдән ҡурҡаһығыҙ, ти улар. Ысынбарлыҡта иһә, ҡурҡыуҙан бигерәк, икенсе бер нәмәне иҫтән сығарырға ярамайҙыр: журналист халҡы матбуғат баҫмаһының ойоштороусыһы һәм аҫыраусыһы булған власть органдары сәйәсәтен үткәрә, уның директива һәм ҡарарҙарын халыҡҡа еткереүсе бит. Ә журналист халыҡ араһында һәм уның тын алышын нығыраҡ тойоп йәшәй һәм эшләй. Шуға күрә лә матбуғат саралары власть менән халыҡ араһында ҡапма-ҡаршылыҡ тыуҙырырға тейеш түгел, киреһенсә, дәүләт сәйәсәтен үткәреүҙә булышлыҡ итеүсе, власть органдары менән халыҡ араһында бәйләнеш булдырыусы, "күпер һалыусы" ролен үтәй. Ләкин быының менән мин, матбуғат саралары өнһөҙ-тынһыҙ йомошсо ролендә булырға тейеш, тип әйтмәйем. Кәрәк тип табыла икән (үҙегеҙгә мәғлүм булыуынса, тормошобоҙҙа быының өсөн һәр саҡ сәбәптәр етерлек) тәнҡитләүҙән, әлегесә тураһын ярып әйтеүҙән дә һис бер тартынып тороу кәрәкмәй, әлбиттә. Тик тәнҡит үҫешкә, позитив үҙгәрештәргә этәреүсе эшлекле тәнҡит булһын ғына. Тураһын бәрәм, тәнҡитләйем, тип бөтә нәмәне ҡараға буяп күрһәтеү ҙә дөрөҫ түгел, иң мөһиме - дөрөҫ йүнәлеш таба белеү кәрәк, йәғни аҡты - ҡара, ҡараны аҡ итеп яҙма. Шул осраҡта тәнҡит өсөн журналистан йә мөхәррирҙән үс алыу, уны эшендә һыйҙырмау кеүек күренештәргә лә урын булмаясаҡ. Әйтеүемсә, матбуғат азатлығының сикләнгән булыуы эштә лә, гәзит йөҙөндә лә сағылыш таба. Нисәмә йылдар матбуғатта эшләп, ҙур тәжрибә тупланыуға ҡарамаҫтан, теге йәки был "ауыртҡан" темаға тотонорға ҡыймайынса, аптырап ҡалған саҡтар ҙа була. Әле быина эш өҫтәлемдә Торатауыбыҙ мәсьәләһенә ҡағылышлы ҡыйыу-ҡыйыу хаттар ята. Бигерәк тә атҡаҙанған химик һәм рационализатор, үткер фекерле бер ағайҙың хаты йөрәккә үтерлек: Торатауҙы ватмай, емермәй ҙә сеймал алыуҙың башҡа юлдарын табырға була бит, тип яҙа автор. Ә инде "Сода" компанияһының "Вестник" гәзите материалдарын уҡыһаң, сәстәр үрә тора: улар тәбиғәт ҡомарҡыһын фәҡәт емереү, кимереү яғын ғына ҡайыра. Ошондай осраҡтарҙа беҙгә, журналистарға, Хөкүмәтебеҙ үткәргән сәйәсәткә таянып эш итергә, уның ярҙамына өмөт бағларға кәрәк тә бит... Үкенескә күрә, ҡайһы саҡ йәмәғәтселек фекерен туплаған матбуғат һүҙе лә власть ишектәре аша үтеп инә алмай, һауала "эленеп" тороп ҡала шул. Һуңғы йылдарҙа матбуғаттың бәҫе, абруйы төшөүе күп йәһәттән ана шуға ла бәйлелер, тием. Халыҡ матбуғат сараларында үҙ яҡлаусыһын, һаҡлаусыһын күрмәй хәҙер. Элекке "Хат юлға саҡыра" кеүек рубрикалар ҙа бөттө, сөнки бөгөнгө шарттарҙа ғәҙеллек юллау ҡыйын. Күп предприятиеларға, ҡайһы бер власть кабинеттарына үтеп инеү юлдары ябыҡ. Әйткәндәй, шуғалыр ҙа, бәлки, халыҡ хәҙер хәҡиҡәтте интернет сайттарынан, форумдарынан эҙләй, ә унда, үҙегеҙгә мәғлүм, әлегесә аҡты ҡара менән бутаусылар ҙа бик күп.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# УЛ БЕҘГӘ ТӘҮСЫҒАНАҠ КЕҮЕК



(Башы 1-се биттә).

Баҫмалағы рубрикалар төрлөлөгө маҡтауға лайыҡ. Уларҙа төрлө авторҙарҙың бер-береһенә оҡшамаған йүнәлештә, киҫкен хәлваҡиғаларға, башҡорт халҡын йылдар буйы борсоуға һалған мәсьәләләргә ҡарата үҙ фекерен белдергән, рух юғарылығын сағылдырған мәҡәләләре баҫылып тора. Мәҫәлән, "Тарихнамә" рубрикаһындағы тарихи шәхестәр тураһында бәйән ителгән сығыштар бик танһыҡ. Заманса фекер йөрөтөргә, тормоштан артта ҡалмаҫҡа кәрәк, әлбиттә, әммә тарихыбыҙҙан башҡа бөгөнгө көндә йәшәй ҙә, киләсәккә маҡсаттар ҡуя ла алмайбыҙ. "Көнитмеш", "Фани донъя", "Йәшәйеш ҡағиҙәләре" рубрикалары бик оҡшай. "Диалог", "Монолог"тарҙа төрлө өлкәлә эшләүсе ғалимдарҙан алып, мәктәп уҡыусыларына тиклем - һәр кем үҙ фекерен еткерә ала. "Киске Өфө", баш ҡала гәзите булараҡ, Өфөнөң бөтә әһәмиәтле, ҡыҙыҡлы, актуаль яңылыҡтарын ваҡытында теүәл яҡтыртып бара. Кемде һаулыҡ буйынса һорауҙар ҡыҙыҡһындыра, улар өсөн "Халыҡ дауаһы" рубрикаһы бар. Ғөмүмән, бында һаулыҡ ҡына түгел, икмәк бешереүҙән алып биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәренә тиклем мәғлүмәт табырға мөмкин.

Күп урында бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар етәксе вазифаһын башҡара, шуға ла ир-егеттәр абруйын үҫтереү темаһы бигерәк тә актуаль. Был йәһәттән "Киске Өфө" гәзитендә өлгөлө ғаиләләр, ҡыҙ һәм ир бала тәрбиәһенә ҡағылышлы темалар күтәрелеүе урынлы. Ғөмүмән, гәзиттең һәр бите, һәр материалы әһәмиәтле. Хатта башваҡыстар ҙа республикабыҙҙың төрлө райондарынан сыҡҡан билдәле шәхестәргә арнап эшләнеүе менән ҡыҙыҡлы. Һәр кем үҙенең тыуған төйәге, күренекле яҡташтары менән ҡыҙыҡһына, башҡа билдәле шәхестәр ҡайһы райондан булыуын белә ала, гәзиткә лә иғтибары арта.

"Киске Өфө" гәзитенең, башҡорт милләтен борсоған бөтә мәсьәләләрҙе халыҡ иғтибарына сығарып, милләттәштәребеҙҙе үҙ-ара фекер алышыуға, тәжрибә уртаҡлашыуға саҡырыуы маҡтауға лайыҡ. Ул халыҡты дөрөҫ йәшәргә, маҡсаттар ҡуйырға өйрәтеү, айыҡ тормош көтөү, ғилем һәм фән менән ҡыҙыҡһындырыу, мәҙәниәтле булыу, һаулығынды ҡайғыртыу, кеше араһында абруйлы булыу кеүек маҡсаттарҙы алға ҡуя. Ошондай төрлө яҡлап алдынғы гәзитте үҙебеҙҙең башҡорт филологияһы факультетында һәр кафедра өсөн алдырабыҙ, унан тыш, коллегаларым шәхсән үҙҙәре өсөн дә яҙыла. Тағы шуны ла өҫтәп әйтергә кәрәк: факультетыбыҙҙың уҡыу пландарында "Киң мәғлүмәт саралары нигеҙҙәре" исемле модуль бар. Был дәрестәрҙә студенттар тележурналистика, радиожурналистика, баҫма матбуғат буйынса теоретик һәм практик белемдәр үҙләштерә. Был өлкәлә мәҡәлә яҙыу тәртибе, актуаль проблемаларҙы билдәләү, баҫманың биҙәлешен өйрәтеү өсөн коллегаларыма "Киске Өфө" өлгө, тәүсығанаҡ булып тора. "Киске Өфө" коллективына ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер, ижад ҡомары теләйем!

**Луиза СӘМСИТОВА,**
**М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты деканы, профессор.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Беләбеҙ, Рәсәй почта хеҙмәтенең гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡын саманан тыш юғары күтәреп ебәреүе беҙҙе лә, һеҙҙе лә тетрәндерҙе. Ә шулай ҙа гәзитебеҙҙең тоғро дуҫтары, аңлы уҡыусыларыбыҙ был ауырлыҡты ла аңлап ҡабул итер, тип ышанып ҡалабыҙ.**

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.
- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға **246 һум**.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум**.
- **Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.
- Республика ҡалаларында йәшәүселәр гәзитте почтанан үҙе барып алыу шарты (до востребования) менән **382 һум 50 тингә** яҙыла ала.
- **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Майҙа 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.
- **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog. kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Һуңғы йыл эсендә Рәсәй Федерацияһы субъекттарының башҡарма власть органдары эшмәкәрлеге һөҙөмтәлелеге рейтингында Башҡортостан Республикаһы бер юлы 26 позицияға юғары күтәрелеп, 10-сы урынды биләне. Был хаҡта республика Хөкүмәте ултырышында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов хәбәр итте. Юғары баһаның уңайлы финанс "эҙемтәләренә" килтереүе мөмкин. Билдәләнеүенсә, Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте былтыр тәүге 20 урынды ҙур ғына аҡсалата премиялар менән баһаланы - 250 миллион һумдан алып 350-гә тиклем.

✓Республика Хөкүмәтендә быйылғы Берҙәм дәүләт имтиханын ойоштороу һәм үткәреү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә булып үтте. "Берҙәм дәүләт имтиханын үткәреү барышын контролдә үҙем тотасаҡмын", - тине Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов һәм былтырғы йомғаҡтар буйынса төбәк БДИ-ның айырым предметтары буйынса аномаль юғары һөҙөмтәләре булған субъекттар иҫәбенә инеүен иҫкә төшөрҙө. Быйыл мотлаҡ предметтарҙы - математика менән рус телен - туғыҙынсы класты тамамлаусы 39 мең уҡыусы һәм 11 класты тамамлаусы 24 мең уҡыусы тапшырасаҡ.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 69 йыллығына арналған тантаналы кисәлә һуғышта ҡатнашыусыларҙың торлаҡ мәсьәләләрен хәл итеү төп бурыстарҙың береһе тип билдәләне. "Һуңғы өс йылда 5,5 мең самаһы ветеран, шул иҫәптән былтыр 1740 кеше торлаҡ менән тәьмин ителде,- тине республика башлығы. - Быйыл 639 кеше фатир аласаҡ. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына беҙҙең бөтә ветерандар ҙа мотлаҡ торлаҡ шарттарын яҡшыртасаҡ".

✓13 майҙан алып Ҡырымдың Белогорск районы муниципаль хеҙмәттәре өсөн уҡытыу курстары башланды. Республика Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы лекторҙары Ҡырым түрәләрен Рәсәй Федерацияһының норматив даирәһендә эшләргә өйрәтәсәк. Артабан Белогорск хеҙмәткәрҙәре өсөн Өфөлә бер аҙналыҡ уҡытыу һәм квалификацияны күтәреү курстары ойоштороласаҡ.

✓ *Терапевтың мәктәптән килгән балаһын туйҙырып сығарғанын бер сәғәттән ашыу көтөп ултырырға мәжбүр булдым. Иллә-мәгәр балаһын оҙатҡас та мине ҡабул итмәй, әхирәте менән ғәйбәт һатыуҙы дауам итте.*



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Аслыҡ-ялангаслыҡ, ауыр һуғыш юлдары үтеп тә һикһән-туҡһан йәшкә еткән ҡайһы бер әбей-бабайҙарҙың, ҡулдарын киҫә һелтәп, таяҡ тотмай йүгереп йөрөүен күреп ғәжәп итәһең ҡайһы саҡта. Һуғыштан һуңғы, сағыштырмаса яҡшы шарттарҙа тыуып үҫһәк тә, һаулыҡ мәсьәләһендә беҙҙең быуын күп осраҡта улар менән ярыша алмай. Йылдан-йыл төрлөләнә барған сирҙәргә иммунитетыбыҙ ҡаршы тора алмаймы, әллә ул бөтөнләй ҡаҡшағанмы? Яҡшы ашап, йылы кейенеп тә үҫтек инде. Спорт менән дә шөғөлләндек. Күрәһең, заводта үҙебеҙҙе аямай эшләү һөҙөмтәһелер: күп сирҙәрҙән хатта дауаханаларҙа ла ятып ҡотолоп булмай.**

# АҠ ХАЛАТЛЫЛАР МЕНӘН ДӘ...

## уртаҡ тел табыуҙары бик ҡыйын



Беҙҙең һаулыҡҡа йәшәү рәүеше, экология һәм тағы бик күп факторҙарҙың кире йә ыңғай йоғонто яһағанын яҡшы беләбеҙ. Әммә кеше һаулығы һағында торорға тейешле медицина нисек эшләй һуң бөгөн? Үҙемдең миҫалымдан сығып, шул турала тураһын әйтеп һөйләп үтмәксемен. Минең был яҙманы гәзит уҡыусылар ялыу итеп түгел, халыҡ белһен һәм етәксе урындағылар ишетһен өсөн яҙылған, тип ҡабул итһен.

Һүҙ ҙә юҡ, һуңғы йылдарҙа Белоретта байтаҡ ҡына һаулыҡ һаҡлау объекттары сафҡа инде: республикалағы иң яҡшы Перинаталь үҙәктәрҙең береһе беҙҙә төҙөлдө, шулай уҡ өр-яңы балалар поликлиникаһы сафҡа баҫты. "Беренсел ҡан тамырҙары" үҙәге лә Башҡортостанда беренселәрҙән булып беҙҙең Муниципаль клиник дауахана базаһында булдырылды. Әкренләп булһа ла Белорет ҡалаһы көнсығыш райондарҙың медицина үҙәгенә әйләнә бара.

Тик "төҙөнөк, астыҡ, булдырҙыҡ" тиеү менән генә эште алға ебәреп булһа икән. Бөгөн беҙгә 250-нән ашыу юғары квалификациялы медицина белгесе кәрәк булһа, шуның яртылабы ғына эшләй. Һөҙөмтәлә сиргә ҡаршы профилактик саралар үткәреү түгел, хатта ауырыуҙарҙы өҙлөктөрмәй дауалау мөмкинлеге лә юҡ. Республика кимәлендә танылыу яулаған, юғары категорияға эйә, Гиппократ антына хыянат итмәй, халыҡ һаулығы һағында тороусы намыҫлы докторҙарыбыҙ күп булған сүрәттә лә. Мин уларҙы исемләп атап китеүҙе маҡсат итеп ҡуйманым. Уларҙың барыһын да бер мәҡәлә күләмендә атап китеү мөмкин дә түгел, һәр береһе айырым маҡтауға лайыҡ.

Иң үкенеслеһе, клиник дауахананың ҡиммәтле компьютер томографында, УЗИ һәм ауырыуҙарҙы тикшерә торған башҡа аппараттарында эшләй алырлыҡ белгестәр етешмәй. Поликлиниканың үҙендә лә УЗИ, мониторинг эшләтермен тимә. Ғүмерҙә лә бөтмәҫ сират унда. Хужалыҡ иҫәбендә эшләүсе поликлиникала һәм Магниттыҡылар асҡан "Тет-а-тет"та аҡса түләп, бөтә төр тикшеренеүҙәрҙе бер көндә үтеп була. Тик һәр сеансы һигеҙ йөҙҙән дә кәм булмаған процедураларҙы түләүгә пенсионерҙар ҡайҙан аҡса еткерергә тейеш?

Маҡтауға лайыҡ докторҙарыбыҙ күп, тиһәм дә, араларында "тотош көтөүҙе бысратҡан" айырым кешеләр ҙә юҡ түгел. Мин өс йыл элек туғыҙ ай буйына кардиологҡа күренә алмай ыҙаландым. Ят та үл! Шулай ҙа Өфөлә стажировка үтеүсе буласаҡ кардиолог ҡайтҡансы дауалана торорға тип, таныш түгел бер терапевҡа яҙҙылар. Терапевтың кабинеты янында уның мәктәптән килгән балаһын туйҙырып сығарғанын бер сәғәттән ашыу көтөп ултырырға мәжбүр булдым. Иллә-мәгәр балаһын оҙатҡас та мине ҡабул итмәй, әхирәте менән ғәйбәт һатыуҙы дауам итте. Был юлы көтөп ултырырға сабырлығым етмәне. Керҙем. Ә терапевт минә төртөп күрһәтеп, икенсе аҡ халатлыға: "Бына, күрәһеңме, һинең күҙ алдыңда минең кабинетҡа негатив энергия килтерҙеләр. Хәҙер ни эшләргә?" - тип ысҡындырҙы. Был әҙәмдә врач этикаһы ла, ябай кешелә булырға тейешле әхлаҡ та юҡлығын аңлап, "Үлһәм дә ҡабат һеҙгә мөрәжәғәт итәһем юҡ", тип сығып киттем йәнем алҡымыма тығылып. Хакимиәттең шул саҡтағы һаулыҡ һаҡлау идаралығы етәксеһенә барғас, ул: "Килешәм, бер һеҙ генә түгел ул терапевҡа ялыу итеүсе, саҡ ҡына түҙергә кәрәк, Өфөләгеһе уҡып ҡайтһын инде..."- тип тынысландырып сығарып ебәрҙе. Шул осраҡтан һуң да ул терапевт тураһында күп тапҡырҙар ишеткәнем булды. Ауырыуҙар уға бер барып күренһә, башҡаса уға эләкмәҫкә тырышалар. Ошо врачтың эш һөҙөмтәһен бер көндө ҡоймала күреп, фотоға төшөрөп алдым. Ҡаланың машиналар ҙа, йәйәүлеләр ҙә күп йөрөгән урынында бар кешегә лә күренерлек итеп "(фамилияһы) - доктор смерть" тип эре хәрефтәр менән яҙып киткәндәр...

Икенсе бер хәл. Ноябрь айында миңә көтмәгәндә инсульт кисерергә тура килде. Реанимациянан һуң палатаға күсергәс, дауаласы врач: "Егерме бер көн дауаланғас, тағы ла шунса ваҡытҡа "Зеленая роща" санаторийына тулы реабилитация үтергә ебәрәбеҙ", - тип шатландырҙы. Юлламаны түләргә утыҙ мең һумды ҡайҙан алайым, мин бит пенсионер, тип ҡурҡыуым да бушҡа булған. Барыһы ла Медицина страховкаһы фонды иҫәбенә икән. Врач өс көндән иртәнге обход ваҡытында баяғы һүҙҙәрен тағы ла дөрөҫләне: "Һеҙгә борсолорға нигеҙ юҡ, шифаханаға мотлаҡ бараһығыҙ, компьютер томографы диагнозды раҫланы", - тине.

Тик иртәгәһенә үҙеме, балаһымы ауырыуҙан, был врач ҡабат ул эшкә сыҡманы. Больницанан сығырға өс көн ҡалғас, санаторий тураһында бүлек мөдиренә әйтһәм, "Тейеш түгел", тигән яуап алдым. Больницанан сыҡҡан көндө кабинетына кереп һөйләшеп тә ҡараным. "Һеҙ пенсионер", тигән генә яуап алдым. Мин эшләп йөрөүсе пенсионер, эштән сыҡҡаным да, сығырға уйлағаным да юҡ, тип иҫбатларға маташыуҙарым да һөҙөмтә бирмәне. Яуап ҡәтғи булды: "Ярамай, Өфөнән пенсионерҙарҙы ебәрергә ҡушмайҙар". Ә бит минең менән бер палатала ятҡан ике кешене ебәрҙеләр ул шифаханаға. Тик уларға 52-53 йәштәр самаһы ине. Шулай ҙа уларҙың береһенә юлламаны тартҡылаша-тартҡылаша саҡ биргәндәрен беләм. Ауырыуҙың ҡатыны Өфөләге таныштары аша санаторийҙан шылтыраттырған, бындағылар ике көнгә һуңлатып булһа ла уны ебәрергә мәжбүр булдылар.

Ҡайһы бер намыҫһыҙ докторҙарҙың ауырыуҙарҙы нисек дауалауы хаҡында тағы бер миҫал. Аяҡтарым ныҡ ауыртҡанға поликлиникала иң яҡшы невролог тип иҫәпләнгән докторҙа булдым. Аяҡ кейемдәрен систереп тә ҡарамайынса, ҡыйбатлы дарыуҙар яҙып бирҙе был. Дарыуҙарҙы ашап бөттөм. Һөҙөмтә булмағас, бер айҙан һуң тағы барып күрендем. "Һеҙ нимә, ул дарыуҙарҙың шифаһы күктән төшә, тип уйлайһығыҙмы? Бының өсөн бер нисә ай, бәлки, йылдар дауамы ла кәрәк булыр", - ти был. Тикшереп ҡараманы барыбер. Һуңынан аяҡтарымдың ниҙән ауыртыуын асыҡлап, диагноз ҡуйыу өсөн хирург Серегинға биш минут та кәрәк булманы. Томограф та уның диагнозын дөрөҫләне.

Президент инициативаһы менән башланған "Социаль туризм" программаһы буйынса сиратҡа яҙылыуға ла өс йыл булып китте. Сираттың осоҡырыйы ла, путевканың ҡасан булырын белгән кеше лә юҡ.

Республика кардиология клиник дауаханаһында ятып сыҡҡанға ла бер ай тулып килә. Унда кәңәш итеп ҡайтарған дарыуҙарҙы яҙҙырып алыу өсөн дә кардиологҡа керә алмай йөрөйөм. Май айына тиклем дә уға инергә талон булманы, ҡасан булыры ла билдәһеҙ. Муниципаль район менән Белорет ҡалаһының 110 мең халҡын бер кардиолог ҡабул итә беҙҙең дауахала...

**Нур МӨХӘММӘТОВ.**
**Белорет ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Һигеҙ күп функциялы балалар майҙансығы Өфөлә Балаларҙы яҡлау көнөнә асыласаҡ. Улар ҡала райондарының торлаҡ хужалығы идаралыҡтары көсө менән төҙөләсәк. Орджоникидзе районы торлаҡ хужалығы идаралығы белгестәре балалар комплексын урынлаштырыуға тотонған да инде - майҙансыҡ Тыныслыҡ урамы, 24 йорто ихатаһында урынлашасаҡ. Ҡалған спорт ҡаласыҡтары шулай уҡ йорттар янындағы ихаталарҙа барлыҡҡа киләсәк. Быйыл тағы ла 28 майҙансыҡ ҡуйыу планлаштырыла.

✓ Башҡортостандан Ҡырымдың Белогорск районына сираттағы автокаруан юлланды. Был республикабыҙ халҡынан һәм предприятиеларынан ҡырымдарға өсөнсө гуманитар акция. Колонна составында - торлаҡ-коммуналь хужалығы ихтыяждары өсөн техника: ике сүп-сар ташыу машинаһы, йөк күтәргес, бульдозер, трактор һәм "УАЗ" автомобиле. Рәсәй гражданлығын тиҙ рәсмиләштереү менән бәйле Ҡырым халҡы өсөн тиҫтәләгән компьютер оҙатылды. Шулай уҡ йөк составында таҙа тоҡомло биш башҡорт айғыры ла бар.

✓Йыл һайын 17 майҙа Рәсәйҙә Халыҡ-ара балаларҙың ышаныс телефоны көнө билдәләнә, ул киң йәмәғәтселекте ауыр тормош шарттарында йәшәүсе балаларҙы һаҡлау һәм уларға ярҙам итеү буйынса сараларҙы көсәйтеү кәрәклегенә иғтибар итергә саҡыра. БР буйынса Эске эштәр министрлығында был көндө ҡыҙыу линия ойоштороласаҡ. 10 сәғәттән алып 16 сәғәткә тиклем (347) 279-49-00 һандары буйынса шылтыратып, үҫмер үҙенең проблемалары тураһында полиция хеҙмәткәрҙәренә, психологтарға һөйләй ала. Стационар телефондан шылтыратыу бушлай һәм аноним рәүештә буласаҡ.

✓Быйыл яҙ Башҡортостанда 10,5 мең гектарҙа урмандарҙы тергеҙеү эштәрен башҡарыу планлаштырыла, тип хәбәр итә республика Урман хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте. Шул уҡ ваҡытта өҫтөнлөк ылыҫлы ағастарға бирелә. Бөгөнгә йәш урман ултыртыу эше дөйөм алғанда республика буйынса 1086 гектар майҙанда тамамланған. Урман участкаларын ҡуртымға алыусылар 257 гектар ултыртҡан. Былтыр Башҡортостан Республикаһында 10,6 мең гектар урман тергеҙелде, ул ҡырҡылған урман майҙанына тап килә. Урман ултыртыу майҙандары буйынса республика Волга буйы федераль округында беренсе урынды биләй.

**“Башинформ”дан.**

✓ *Автобус туҡталыштарының исемдәре дөрөҫ тәржемә ителгән, тик һүҙҙәр дөрөҫ урынлаштырылмаған. Тәүҙә туҡталыштың атамаһы, шунан һуң ғына "туҡталышы" тигән һүҙ ҡуйылырға тейеш, киреһенсә түгел.*



УЙЛЫҒА - УЙ

# КОСМОНАВТ БУЛАМ,

## сөнки мин илһөйәр!

**Һәр китап ҡайһы осорҙо һүрәтләүенә ҡарап, шул ваҡытта йәшәгән кешеләрҙең тормошон, аҙмышын ғына яҡтыртып ҡалмай, уй-хыялдарын, ҡараштарын, идеяларын да сағылдыра. Минең өсөн бигерәк тә балаларҙың хыялдары, уҙҙәренең киләсәген нисек күҙаллауҙары тураһында уҡыуы ҡыҙыҡ тойола. Тап бына уларҙың яҡты киләсәк, тыныс тормош, ғаилә идиллияһы, үҫкәс, кем буласағы тураһындағы уй-хыялдарына ҡарап, йылдар үтеү менән кешелек, йәмғиәт ҡоролошо нисек үҙгәреүен күҙәтергә мөмкин.**

Мәҫәлән, Совет власы осоронда ижад ителгән художестволы әҙәбиәт өлгөләренә күҙ һалғанда, унда балалар иң башта Фрунзе, Буденный, Чапаев, йә булмаһа, ябай ҡыҙылармеец булырға хыяллана. Тимәк, 20-се быуат баштарында революция шауҡымы үтеп бөтмәгән, яңы ғына формалашып, көс йыйып килгән дәүләттә балалар яңы власты яҡларлыҡ, революция яулаған еңеүҙәре һаҡларлыҡ илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләнгән, тигән һығымта яһарға мөмкин.

Саҡ ҡына һуңыраҡ, инде Бөйөк Ватан һуғышы йылдарын һүрәтләгән китаптарҙа балалар тыуған еренә килгән баҫҡынсыларҙы ҡыуырға, бәләкәй генә булыуҙарына ҡарамаҫтан, танктарға ҡаршы сығырға әҙер илһөйәрҙәр итеп тасуирлана. Уларҙың кумиры - Тыуған илен күкрәге менән һаҡлаған совет һалдаты, дошман самолеттарына ҡаршы сыҡҡан ҡыйыу летчик, йәки әллә күпме серҙәрҙе асыҡлап, иленә тоғро хеҙмәт иткән разведчик.

Артабан, 1960-1980 йылдарҙы үҙ эсенә алған әҫәрҙәрҙе ҡараһаҡ, ундағы балалар билдәһеҙ космос, галактика киңлектәрен гиҙеп йөрөйәсәк космонавт, донъя кимәлендә асыштар яһарға теләүсе ғалим, бөтә кешелекте туйҙырырлыҡ иген игеүсе комбайнер, табип, уҡытыусы, шофер булырға хыяллана. 1970 йылдарҙа үҫмерҙәр араһында үткәрелгән социаль һорау алыу һөҙөмтәләренә күҙ һалһаҡ, малайҙар өсөн иң шәп профессиялар: космонавт (16 процент), табип (14 процент), йөк машинаһы йөрөтөүсе (12 процент). Ҡыҙҙар араһында уҡытыусы (20 процент), табип (11 процент), балерина (8 процент) һәм өр-яңы "кәләш" (3 процент) һөнәрен үҙләштерергә теләүселәр барлыҡҡа килә.

Ә бына үҙгәртеп ҡороу йылдарындағы әҙәбиәттән малайҙарҙың эшҡыуар, юрист, хоҡуҡ һаҡлау органдарында эшләргә теләүселәр, менеджер, хатта профессиональ бур йәки кеше алдаусы булырға хыялланыуы асыҡлана. Ҡыҙҙар араһында бер ҡайҙа ла эшләмәй, күп аҡсаға эйә булыу теләген белдереүселәр (5 процент) барлыҡҡа килә. Бөгөн балаларҙан "Кем булырға теләр инең? Кемгә оҡшағың килә?" тип һораһаң, уларҙың спортсы, шәхси эшҡыуар, артист, йырсы, компьютер белгесе булырға теләүен аңларға мөмкин. Кумирҙары ла космонавт, ил һаҡсыһы, игенсе түгел, ә эстрада йондоҙо, билдәле футболсы, Гарри Поттер, Үрмәксе-Кеше, сит ил енел машинаһында елдергән эшҡыуар.

Тормошобоҙ яңырыу, мөмкинлектәребеҙ үҫеү менән бергә балаларыбыҙҙың хыялдары ла үҙгәреүе, бер яҡтан, бик ҡыуаныслы һымаҡ. Ә нинә, тормошта күп иттереп аҡса эшләү, байлыҡ туплау, сит илдәргә ял итергә йөрөү, ҡиммәтле техника менән ҡулланыу модала булғанда, нишләп балаларға ла ошо турала хыялланмаҫҡа? Бәлки, киләсәктә уй-ниәттәре тормошҡа ашыр? Тик шундай борсолоу ҙа бар: шундай оло хыял йөрөткән балалар йөрәгендә илһөйәрлеккә лә урын ҡаламы икән?

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙОРТТАРҘА - ПОРТРЕТТАР

**Бөйөк Еңеү көнө алдынан Сипайлово биҫтәһендә күп ҡатлы торлаҡ йорттоң стенаһын биҙәү тамамланды. Өфөнөң билдәле граффитистары Олег Кайбышев менән Александр Кайдалов Гагарин урамындағы 5-се йорттоң фасадына Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының портреттарын төшөрҙө.**



Картинаға нигеҙ итеп аныҡ фронтовиктарҙың фотолары файҙаланылһа ла, һүрәттә улар саҡ ҡына үҙгәртелгән, сөнки авторҙар һуғыштың йыйылма геройы образын һүрәтләргә теләгән. Фотолар аҫтына Роберт Рождественскийҙың "Спасибо за память, потомки" тип аталған шиғырына яҙылған йыр тексы, ә өҫкө мөйөшкә Ҡыҙыл Армия һалдаттары һәм офицерҙары өсөн төп хәрби награда булып торған Ҡыҙыл Байраҡ ордены һүрәте урынлаштырылған.

Авторҙар тарафынан киндер урынына файҙаланылған йорт стенаһы мәктәпкә һәм балалар баҡсаһына яҡын булыуы ҡыуаныслы. Тимәк, балалар көн һайын һүрәтте күреп йөрөп, тарихыбыҙҙа ауыр йылдар һәм бөйөк еңеүҙәр булыуын һәр саҡ иҫләйәсәк. Проект авторҙарының береһе - Олег Кайбышев та был фекерҙе ҡеүәтләй: "Картинабыҙҙы ижад итеп, беҙ үҙебеҙҙең бөйөк геройҙарҙың ейәндәре икәнлегебеҙҙе күрһәтергә теләнек. Шул уҡ ваҡытта йәштәргә граффити һәм вандализмдың бер үк нәмә түгеллеген, ә яҡшы стрит-арт - ҡаланы тағы ла матурыраҡ итеүсе, һуғыш тураһындағы хәтерҙе һаҡларға ярҙам итеүсе сәнғәт икәнлеген еткерергә тырыштыҡ".

Әйткәндәй, был Өфөлә йорт фасадын биҙәп торған беренсе һүрәт түгел. Бығаса тиклем Гагарин урамындағы туғыҙ ҡатлы йорт фасадын Гагариндың портреты биҙәһә, Инорстағы Мушников урамындағы 20-се йортта йәшәүселәр әсә һәм бала һүрәтенә ҡарап ҡыуана ине.

# БЕЛОГОРСК УРАМЫ - ӨФӨЛӘ

**Баш ҡала урамдарының береһе Ҡырымдың Башҡортостан шефлыҡ иткән Белогорск районы хөрмәтенә ошо атаманы алды. Бындай ҡарар Өфө ҡала округы Советы ултырышында бер тауыштан ҡабул ителде.**

Шулай уҡ баш ҡалала Бәрхәт, Йүкә, Сәй, хатта Мөгжизәле урам, Моторҙар эшләүселәр яры һәм Көҙ бульвары барлыҡҡа килде. Дөйөм алғанда, 26 яңы урам һәм тыҡрыҡҡа исем ҡушылды. Уларҙың бишеһе - Калинин районы, ҡалғандары Октябрь районы территорияларында урынлашҡан.

Депутаттарға баштан уҡ тәҡдим ителгән документ проектында Өфөгә ҡағылышы булмаған атамалар, бынан тыш, һигеҙ аҙ билдәле кешенең фамилияһы була. Өфөлә ҡайһы бер кешеләр депутаттарға урамдарға исем биреүҙе контролгә алып, әһәмиәте аҙ булған атамаларҙы ҡушыуға юл ҡуймаҫҡа бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итә. Уларҙың мөрәжәғәтен иҫәпкә алып, депутаттар проекттың эшен туҡтата. Һуңынан инде эксперт комиссияһы үҙенең ултырышында урамдарға, майҙандарға, башҡа территорияларға ниндәй атамалар биреү мәсьәләһен тикшерә. Һөҙөмтәлә тәҡдим ителгән барлыҡ исемдәр ҙә тигәндәй үҙгәртелә. Өмөтбаев, Хәйруллин, Атнабаев урамдары урынына Саған, Япраҡлы, Именлек урамдары, Алтын һәм Көҙ тыҡрыҡтары барлыҡҡа килә.

Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге бинаһы эргәһендәге урамға - Фән, ә Нуғай ауылындағы яңы урамдарҙың береһенә Ҡырымдың Белогорск районы хөрмәтенә Белогорск атамаһы бирелә. Өс тиҫтәгә яҡын "фамилиялы" яңы урамдарҙың бары тик өсөһөн генә ҡалдырырға ҡарар ителә. Улар барыһы ла Инорс биҫтәһенә тура килә. Улар - осоусы Кобелев урамы, "УМПО"-ның мәшһүр директоры иҫтәлегенә Валерий Лесунов урамы, Михаил Шолохов урамы.

**Арина РӘХИМҠОЛОВА.**
**"Башинформ".**

ЙӨҘӨН КҮРЕП...

# АЛТАҠТАЛАР НИ ҺӨЙЛӘЙ?




**Баш ҡалабыҙ урамдары бик йәмле - һүҙ әйтерлек түгел. Ҡышҡы сүп-сарҙы ла йыйып алғас, бөтә тирә-йүн күркәмләнеп, таҙарып ҡалды. Тик магазиндар, кафелар, төрлө ойошмаларҙың алтаҡталарындағы хаталы яҙыуҙар ғына ҡала йөҙөн йәмһеҙләп, йөҙҙө ҡыҙартыуҙы дауам итә. Хәҙер улар элеккегә ҡарағанда һирәгерәк, әммә осрай әле.**

Был минең һөнәри "ауырыуым"дыр инде ул: республиканың ҡайһы ҡалаһында, ҡайһы районында булһам да, башҡортса яҙыуҙарҙы уҡып, эстән генә хаталарын төҙәтеп тик йөрөйөм. Ул турала күп яҙылар, шулай ҙа ҡайһы бер күҙәтеүҙәрем менән уртаҡлашмаҡсы булдым.

Автобус туҡталыштарының исемдәре дөрөҫ тәржемә ителгән, тик һүҙҙәр дөрөҫ урынлаштырылмаған. Тәүҙә туҡталыштың атамаһы, шунан һуң ғына "*туҡталышы*" тигән һүҙ ҡуйылырға тейеш, киреһенсә түгел. Был хәл айырыуса республиканың бәләкәй ҡалаларында йыш күҙәтелә. Магазин исемдәрендә лә ошо уҡ хата ебәрелә. Йәнәһе, башҡортса һүҙҙе тәүге урынға ҡуйырға кәрәкмәгән. Ҡушҡылар үтәү һәйбәт, әлбиттә. Әммә тәүҙә уйларға кәрәк бит. Өлгө: *магазин - "Аҙыҡ-түлек" - магазины.*

Тағы ла бер миҫал. *Кафеһе "Мангал"* түгел, ә *"Мангал" кафеһы.* Бында тағы бер йыш осрай торған хата күренә: "*кафе*" һүҙенән һуң ҡалын ялғау ҡушыла. Ғөмүмән, барлыҡ рус һүҙҙәренән һуң (шулай уҡ башҡа телдәрҙән үҙләштерелгәндәрҙә лә) шулай, тик *-ль, -нь* хәрефтәренә бөткән һүҙҙәрҙә генә нәҙек ялғау була: *автомобилдәр, Тюмендә.* Ә ҡайһы бер магазин баштарында "*Запас частәр*" тигән яҙыуҙы күрергә мөмкин, дөрөҫө - *запас частар.*

**Хәлиҙә МИҢРАНОВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2014 йылдың 4 июнендә Өфө амфитеатрында (Конгресс-холл артындағы майҙанда) Башҡортостан сәнғәт оҫталарының һәм республика Йәштәр симфоник оркестрының open air форматында "Симфоник төн" концерты уҙасаҡ. Концертта халыҡ-ара, бөтә Рәсәй һәм республика конкурстары лауреаттары ҡатнашасаҡ. Башлана кискө сәғәт һигеҙҙә. Open air (асыҡ һауала) концерттар Европа илдәрендә һәм Рәсәйҙә киң таралған. 2013 йылда Өфөлә Конгресс-холл артындағы майҙанда беренсе тапҡыр музыка сәнғәте йондоҙҙары һәм Башҡортостан Республикаһының Милли симфоник оркестры ҡатнашлығында масштаблы open air үтте. Шунан алып майҙансыҡҡа "Өфө амфитеатры" исеме берекетелде.

✓1 майҙан алып 17 йәше тулмаған балаларға өлкәндәрһеҙ йәмәғәт урындарында 22 сәғәткә тиклем түгел, ә 24 сәғәткә тиклем булырға мөмкин, тип хәбәр итә республика парламентының матбуғат хеҙмәте. Был норма "Башҡортостан Республикаһында бала хоҡуҡтарының төп гарантиялары тураһында" БР законында яҙылған һәм 2010 йылдан алып эшләп килә. 1 октябрҙән алып "комендант сәғәтенең" ваҡыты тағы ла оҙайтыласаҡ. 17 йәше тулмаған балаларҙың төндә ата-әсәләренән башҡа йәмәғәт урындарында булыуы 500 һумдан 1000 һумға тиклем күләмдәге административ штраф менән янай. Административ хоҡуҡ боҙоу ҡабатланған хәлдә, штраф күләме бер мендән алып ике меңгә тиклем арта.

✓Уҙған ял көндәрендә 15 волонтер Йөрәктау шиханында экологик акция үткәреп, 20 тоҡ сүп-сар йыйҙы. Өс сәғәттә экологик активистар тауҙың тик көнбайыш битләүен генә таҙартып өлгөрҙө. 17 майҙа өмә дауам итәсәк. Волонтерҙарға тауҙың көнсығыш битләүен таҙартырға кәрәк буласаҡ. Ойоштороусылар әйтеүенсә, сүп-сар ҡаялар алдындағы майҙансыҡта, йылға буйында ҡалды. Экологик акцияла бөтә теләүселәр ҙә ҡатнаша ала.

✓Башҡортостанда йылы һәм ҡоро һауа торошо урынлашасаҡ, тип хәбәр итә Башгидромет. 17 һәм 18 майҙа термометр бағанаһы 23-24 градусҡа тиклем төшәсәк, бер аҙ ямғыр яуыуы ихтимал. Синоптиктарҙың фаразлауҙары буйынса, майҙың кистәре һалҡын булып ҡаласаҡ. 20 майға ҡырау төшөү ихтималлығы һаҡлана.

БАЛАЛАР ҠОРО

**Бер олоно, бер кесене тыңла, тигән халыҡ аҡылына таянып, уңыш һәм уңышһыҙлыҡ, лидерлыҡ, башҡортлоҡ тураһында һәм йәмғиәтебеҙҙе борсоған башҡа темаларға Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының 11-се синыф уҡыусылары Салауат Шафиҡов, Айбулат Юламанов, Айгөл Ишбулатова, Ләйсән Зәйнетдинова менән әңгәмәләштек.**

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШЕҮҘӘН,

## башҡорт булыуыңдан оялма!

**➔ "Уңышһыҙлыҡҡа осрау - енәйәт түгел. Алдыңа мөмкинлектәреңдән түбәнерәк маҡсаттар ҡуйыу енәйәтселек ҡылыуға тиң", тигән аҡыл эйәһе. Ә һеҙ был фекер тураһында нимә уйлайһығыҙ?**

**Салауат:** Тормошҡа ашыра алғандан бәләкәйерәк маҡсат ҡуйғас, кеше үҙенә түбән баһа бирә булып сыға бит. Кеше эшләй аламы-юҡмы, юғары маҡсаттар, хыялдар менән йәшәргә тейеш. Бөйөк маҡсаттарға өлгәшкәнсе йылдар үтергә тейеш. Күпме тапҡыр уңышһыҙлыҡҡа осраһа ла, маҡсатлы кеше барыбер алға ынтыласаҡ, үҙендә ауырлыҡтарҙы еңерлек көс тә табасаҡ. Ә көндәлек талаптарҙан сығып ҡына эш итеп йөрөһә, ул шул кимәлдә ҡаласаҡ, юғары күтәрелмәйәсәк.

**Айгөл:** Урыҫтың шундай мәҡәле бар: "Бөркөткә тейҙереү өсөн йондоҙҙарға төбәргә кәрәк". Маҡсаттар уға өлгәшеү өсөн, тормошҡа ашырыу өсөн ҡуйыла. Шуға ла мөмкинлектәреңде түбән баһалап, эшләй алған эшеңдән баш тартырға ярамай. Минең маҡсатым, мәҫәлән, киләсәктә республикамдың лайыҡлы гражданы булыу, халҡыма хеҙмәт итеү. Был иң юғары маҡсатым булһа, әлеге көндә мин уға өлгәшеү өсөн мәктәптә тик яҡшы билдәләргә генә өлгәшәм, белемемде юғары уҡыу йортонда камиллаштырырға иҫәп тотам.



**Ләйсән:** Берәүҙең дә тормошо таҡыр һәм тура юлдарҙан ғына тормай, уңышһыҙлыҡтарға осрап тороу - ғәҙәти күренеш. Иң мөһиме, тормош бороломтарында үҙ мөмкинлегеңдә икеләнеп, юғалып ҡалмаҫҡа кәрәк. Сөнки кеше үҙ-үҙендә икеләнһә, ул бер ҡасан да тормошта үҙ юлын, үҙ урынын таба алмаясаҡ. Һәр яңылыш аҙым, уңышһыҙлыҡ фәһем, аҡыл, һабаҡ бирә, артабан үҫергә ярҙам итә.

**Айбулат:** Икеләнеү, тигәндән, һәр кем был тойғоно кисерә һәм кисерергә тейеш. Әле бына беҙ ҙә, мәктәпте тамамлағас, ҡайһы юғары уҡыу йортон һайларға икән, тигән икеләнеү алдындабыҙ. Дөрөҫ яуапты табыу өсөн мин яҡындарымдың кәңәштәренә ҡолаҡ һалған осраҡта ла, тик үҙемде генә тыңлап эш итәсәкмен. Сөнки һин киләсәгеңде тик үҙең билдәләргә, ул хаҡта уйланырға, ете ҡат үлсәргә, юлыңда осраясаҡ һынауҙарҙы, уңышһыҙлыҡтарҙы нисек үтеү алымдарын, ысулдарын эҙләргә тейешһең.

**➔ Бөгөнгө көндә башҡорт йәштәре өсөн иң ауыр "енәйәт" нимә ул?**

**Ләйсән:** Башҡорт балаларының, йәштәренең үҙенең башҡортлоғонан оялыуы - ата-әсә, милләт, Хоҙай алдындағы енәйәт ул. Бер ҡасан да башҡорт телендә һөйләшмәгән, ололар ҙа, кеселәр ҙә уға башҡортса өндәшкәндә лә русса яуап биргән балаларҙы йыш күҙәтергә тура килә. Минеңсә, был бала үҫкәс тә үҙ балаларына башҡорт телен өйрәтмәйәсәк, үҙе башҡорт булһа ла, милләттәштәрен хөрмәт итмәйәсәк.

**Салауат:** Нисек кенә аянысло булмаһын, милләттәштәрем бер-береһе өсөн шатлана белмәй, хатта бер-береһенән көнләшеберәк йәшәй һымаҡ. Бына ошонда сағыла ул, минеңсә, башҡорт йәштәренең бер-береһенә ҡарата "енәйәте". Әлеге көндә беҙҙең милләт вәкилдәрен үҙенең башҡортлоғонан оялып йөрөүселәргә һәм артыҡ ныҡ башҡорт булырға тырышыусыларға бүлергә була. Уларҙың тәүгеләре башҡорт булыуҙарын йәшерә, икенселәре саманан артыҡ ҡыланып, һәр ерҙә башҡортлоғон иҫбатларға тырыша. Тыуған республикабыҙ, милләтебеҙ өсөн файҙалы эштәр башҡарып, матур һөҙөмтәләргә өлгәшкән мәҙәни башҡорт булырға ынтылырға кәрәк беҙгә. Шуға ла мин лайыҡлы белем алып, яҡшы һөнәр һайлап, үҙ эшемдең оҫтаһы булып, ошо хәҡиҡәткә өлгәшергә ынтылам.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ҺОРАУ-ЯУАП

### ЙӘШӘР УРЫНЫ БУЛМАҺА...

**Суд бурыслынан миңә 300 мең һум күләмендәге аҡсаны ҡайтарып бирергә ҡарар сығарҙы. Суд приставы был кешегә сит илгә сығыу юлын япты, банктағы бурысын ҡулға алды. Бурыслының исеменә яҙылған машинаһын тапманылар, ә йортоноң хаҡы бурыс суммаһынан артып китә. Бурысты ҡайтарыуҙы тиҙләтеү өсөн беҙгә ни эшләргә?**

- Был йәһәттән һеҙгә ике төрлө юл бар. Тәүгеһе унаң еңелерәк: бурыслының банктағы иҫәбе рәүешендәге күсемһеҙ милке ҡулға алынғанлыҡтан, бурысты ошо милек иҫәбенән ҡайтартыуы ауыр түгел. Иҫәптәге һәм һаҡлыҡтағы аҡса ҡулға алынғас, кредит ойошмаһына был хаҡта мәғлүмәт килеп етеү менән, ошо депозит буйынса сығымдар операцияһын туҡтата, ләкин бурысты ҡайтарыу өсөн банкка айырым документ - башҡарыу ҡағыҙы кәрәк. Ул бурысты юллаусы йәки суд башҡарыусыһы (пристав) тарафынан килтерелә. Иҫәптә аҡса етерлек булмаған хәлдә бурыс күсемһеҙ милек - әлеге осраҡта йорт иҫәбенә башҡарыла, ләкин бурыслының ошонан башҡа йәшәр урыны юҡ икән, был вариант иҫәпкә алынмай.

### ФАТИР БҮЛӘК ИТҺӘЛӘР...

**Ата-әсәйем фатир һатып алып, уны миңә бүләк итергә ниәтләй. Фатирға документтарҙы күпме ваҡыт эсендә юллап алырға тейешмен?**

- Бүләк итеү килешеүе - бер яҡлы ғәмәл ул, шуға күрә, әгәр был ваҡытҡа бүләк итеүселәр үҙ ниәттәрен аңлаған һәм юридик һәләттә булған хәлдә, уларҙың ғәмәленә ҡаршы килеү мөмкин түгел. Был торлаҡҡа һеҙ милек хоҡуғын башҡармайынса тороп, унаң милексеһе була алмайһығыҙ, сөнки күсемһеҙ милеккә милек хоҡуғы бүләк итеү килешеүенә ҡул ҡуйғандан түгел, ә милеккә хоҡуҡ тураһында яңы таныҡлыҡ алған ваҡыттан көсөнә инә.

### ТАУАРҘЫ КИРЕ АЛМАЙҘАР

**Тауарҙы арзанға һатҡан ерҙән (распродажа) күлдәк һатып алдым. Өйгә ҡайтҡас, унда һүтелгән урыны барлығын белдем. Һатыусы әйберҙең арзанға һатҡан ерҙә алынғанлығына һылтанып, аҡсаны кире ҡайтарыуҙан баш тартты. Был дөрөҫмө?**

- Тауарҙы арзанға һатыу - сифатлы әйберҙе ташлама менән һатыу. Хаҡтар, башлыса, миҙгеле үткән йәки моданан сыҡҡан аныҡ әйбергә төшөрөлә. Шуға күрә һатып алыусының әйберҙе алмаштырыуға йәки аҡсаны кире ҡайтарыуға тулы хоҡуғы бар. Ләкин һатыусы әйбергә хаҡ ниндәйҙер етешһеҙлек булыу һөҙөмтәһендә төшөрөлөүен әйткән булһа, аҡсаны кире ҡайтарыу хоҡуғы юғала. Был хаҡта РФ-ның "Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау тураһында"ғы Законы́ң 18-се статьяһында әйтелә.

### КИТАП АЛМАШТЫРЫЛМАЙ

**Ҡыҙыма дәреслекте яңылыш һатып алғанмын. Магазиндан алынған чек бар. Ләкин магазин аҡсаны кире ҡайтарыуҙан баш тартты. Шулай уҡ, яңы килгән партияның ҡыйбатыраҡ булыуына һылтанып, китапты алмаштырмайҙар. Өҫтәп түләп, кәрәкле дәреслекте алырға теләүемә лә риза түгелдәр. Был законлымы?**

- Законлы, сөнки китаптар һатып алғандан һуң кире ҡайтарып булмай торған махсус исемлеккә инә. Был исемлек РФ Хөкүмәте тарафынан 1998 йылдың 19 ноябрендәге 55-се Ҡарарҙа раҫланған.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәктең ишемик ауырыуы

❖ Ҡыҙыл көртмәле япрағы (брусника), ортосифон, йүкә сәскәһе (липа), бесәй үләне тамыры (валериана лекарственная), ҡандала үләне (донник), ҡыр кесерткәне (крапива двудомная), бөтнөк (мята), гөлйемеш емеше, мышар емеше, ҡара бөрлөгән (ежевика) япрағы, ҡайын япрағы - тигеҙ өлөштә. 8 грамм үлән ҡатнашмаһына 300 мл ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнар һыулы һауытта 15 минут торорға, һуңынан термоста 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4-5 тапҡыр ашағандан һуң 20 минут үткәс, йылы көйөнә 1/4-1/3 стакан эсергә.

❖ 10 грамм - мелисса үләне, 5 грамм - аҡ әнис (тмин) орлоғо, 5 грамм - арса (трава вереска) үләне, 5 грамм - арника сәскәһе, 10 грамм - ҡандала үләне, 5 грамм - эт табан (манжетка) япрағы, 15 грамм - арыҫлан ҡойроғо (пустырник) үләне, 10 грамм - бәпембә тамыры, 5 грамм - кукуруз мыйыҡсалары, 5-әр грамм - урман ҡурай еләгенең йәш үҫентеләре, аҡтамыр (пырей) тамыры, 10 грамм - ҡыҙыл көртмәле япрағы. 9 грамм үлән ҡатнашмаһына 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 3 сәғәт термоста төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда йылы көйөнә 1/4 стакан эсергә.

❖ Мелисса үләне, омела үҫентеләре, әнис орлоғо, аҡ сәскә (ромашка), күгүлән (спорыш), бәйғәмбәр тырнағы (календула) сәскәһе, туғай клеверы (клевер луговой) сәскәһе, каштан сәскәһе (конский каштан), ынйы сәскәһе (ландыш) япрағы, гөлйемеш емеше, ҡара бөрлөгән япрағы, цикорий тамыры, һоло һаламы (овсяная солома), мәтрүшкә (душица) - тигеҙ өлөштә. 10 грамм үләнгә 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнап ултырған һыулы һауытта 10 минут торорға, 2 сәғәт йылы урында төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/4 стакан эсергә.

Үләндәрҙе эсеү оҙайлығы 2-2,5 айҙан артмаҫҡа тейеш. Курстар араһындағы интервал - 7-10 көн. Хәлегеҙ яҡшы булһа, үлән менән дауаланыу курстарын йылына 2-3 тапҡыр 3-4 аҙна дауам итергә була.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КӨНКҮРЕШ ЙОЛАЛАРЫ

**XIX-XX быуаттарҙа йорттарҙа буфеттар, һауыт-һаба өсөн стена шкафтары, өҫтәл-ултырғыстар барлыҡҡа килгән. Һәр йортта биҙрәләр, һөт күнәге, май яҙғыс, иген, ҡымыҙ, ҡатыҡ, бал өсөн тәпән, ҡул тирмәне, төрлө ҙурлыҡтағы һауыттар булған.**

Мейес ҡаҙанда ризыҡ әҙерләү һәм икмәк бешереү өсөн тәғәйенләнгән һәм ярайһы ҡатмарлы конструкция иҫәпләнгән. Мейестең корпусында утын киптереү өсөн уйым, самауыр, сынаяҡлы батмус, еҙ тас, ҡомған һәм башҡа кәрәк-яраҡтар ҡуйыу урыны ла булған.

Эсер өсөн һыуҙы тәбиғи һыу яткылығынан - таҙа шишмәләрҙән, йылғанан, һирәгерәк, махсус ҡаҙылған ҡоҙоҡтарҙан алынған. Ҡышын кәрәк булғанда иретелгән ҡар йәки боҙ һыуын ҡулланғандар. Һыу сығанағын эҙләүҙең үҙенсәлекле ысулдары булған. Мәҫәлән, һыуһаған үгеҙ ҡайһы ерҙе тырнай башлай, шунда ҡоҙоҡ ҡаҙғандар. Ҡаҙҙар ҡайһы урында ерҙә соҡсона йәки ял итергә ята, был урында ла һыу бар, тип иҫәпләгәндәр. Ҡоҙоҡ өсөн урын эҙләгәндә суйын таба ла ҡулланылған. Ҡайһы ерҙә түңкәрелгән табаның төбөнә һыу тамсылары ултырған, шунда ҡоҙоҡ ҡаҙғандар. Ер аҫтындағы һыуҙы тал сыбығы менән эҙләү бик киң таралған. Ботаҡтар әйләнә башлағанса ер өҫтөнән йөрөткәндәр. Ҡоҙоҡтоң стенаһын буралған бура йәки таш менән нығытҡандар. Муллыҡ сығанағы булған һыуға суп-сар ташлау тыйылған. Белорет, Бөрйән, Ейәнсура, Күгәрсен райондарында йәшәүсе ололар һөйләүенсә, йыл һайын яҙ ир-ат йылғаларҙың төбөн таҙартҡан. Ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар ярҙағы сүпте йыйған. Был сара өмә тип аталып, унын аҙағынан күмәкләп сәй эскәндәр.

Йортта көндәлек тукланыу түбәндәге тәртиптә башҡарылған: иртәнге сәй, төшкө аш, киске аш. Аш-һыуҙы ҡатын-ҡыҙҙар әҙерләгән. Йорт эштәрендә булышырға яраткан ир-атҡа йәмғиәттә ҡараш яҡшы булмаған, уны, кәмһетеп, бисәкәй, тип атап йөрөткәндәр. Тик малды ир-ат ҡына һуя алған. Улар шулай уҡ ҡышлыҡҡа ит әҙерләү, малды ҡарау, иген ярҙыры ирҙәр эше иҫәпләнгән.

Ҡатын-ҡыҙҙың бурысы булып малды ҡарау, һыйыр һәм бейәләрҙе һауыу, баҫыу эштәрендә ҡатнашыу, йөн эшкәртеү, кейеҙ баҫыу, киндер әҙерләү, кейем тегеү, йортто, балаларҙы ҡарау торған. Ул ашарға бешергән, икмәк, көлсә һалған, ҡымыҙ, айран, ҡорот әҙерләгән, ҡул тирмәнендә иген тартҡан, үләндәр, емеш-еләк йыйған. Ҡыҙ бала иртә йәштән йорт эштәренә йәлеп ителгән, 10-11 йәшкә еткәндә улар барлыҡ эштәрҙе лә белгән.

Ҙур ғаиләләрҙә хужалыҡ алып барыу эшендә иң олоһо булып ҡәйнә һаналған. Ул килендәренә эш ҡушҡан, ашарға бешереү өсөн аҙыҡ-түлек бүлгән. Атай, әсәй һәм балаларҙан торған ғаиләләрҙә барлыҡ хужалыҡ эштәре ҡатын иңенә яткан. Ирҙең бер нисә ҡатыны булған ғаиләләрҙә, ғәҙәттә, шулай уҡ бергә тукланғандар. Ризыҡ әҙерләү кесе ҡатындың бурысы иҫәпләнгән, ҡайһы берҙә ҡатындар сиратлап ашарға бешергән.

Хужалыҡ алып барыу, шулай уҡ социаль тормошта башҡорт ҡатын-ҡыҙы башҡа мосолман ҡатын-ҡыҙҙарына ҡарағанда күпкә ирекле булған.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион тукланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БАЛАЛАР ҠОРО

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШЕҮҘӘН,

## башҡорт булыуындан оялма!



**(Башы 5-се биттә).**

**Ләйсән:** Мин үҙем башҡорттар араһында ундай көнләшеүсәнлеккә тап булғаным юҡ, шуға күрә Салауат менән килешеп етмәйем. Йәштәштәрем араһында башҡорттарҙы күреп ҡалһам, улар менән танышырға, аралашырға ынтылам, шуның менән үҙемде бәхетле тоям. Ҡайҙа ғына осрашһаҡ та, үҙ милләттәштәрем менән тиҙерәк уртаҡ тел табам, уларҙы күптәнге дуҫтарым кеүек ҡабул итәм. Атайымдың да, башҡорттар араһында булһынмы, сит милләттәр араһындамы, таныштары һәм яҡын дуҫтары бихисап. Ул, үҙе әйтмешләй, һәр ерҙә милләттәштәре менән аралашыуҙан көс ала.

**➔ Халыҡ алдындағы бурысыбыҙ тураһында һүҙ сыҡҡас, халыҡ алдындағы абруй тураһында ла һөйләшәйек әле. Абруй тик ололарға ғына кәрәкме?**

**Салауат:** Абруйлы кеше, тигән төшөнсә, минеңсә, тик оло быуын кешеләренә ҡарата ғына ҡулланылырға тейеш. Улар араһынан да милләте һәм иле өсөн күп эшләгәндәре генә шундай хөрмәткә лайыҡ. Абруйлы кеше үҙе эшләгән коллективта өлгө, лидер, тәжрибә мәктәбе. Ә йәштәр араһында кешелек сифаттары, уҡыуҙа, спортта, йәмәғәт эштәрендә ниндәйҙер кимәлдә уныш ҡаҙанғандары өсөн ихтирам иткән тиҫтерҙәрем бар, ләкин уларға ҡарата "абруй" төшөнсәһен ҡуллана алмайым әлегә.

**Айбулат:** Минеңсә лә әле бер нәмәгә лә өлгөшмәгән беҙҙең тиҫтерҙәр араһында "абруй" төшөнсәһен ҡулланып булмай. Синыфташтарҙың берәйһе үҙенең абруйын күтәрергә ынтылып, һәр нәмәлә беренсе булырға тырыша башлаһа, уға сәйерһенеп ҡарайҙар. Абруй - йәмғиәт тарафынан ваҡыт үтеү менән үҙенән-үҙе формалашҡан ғәҙел мөнәсәбәт ул.

**Ләйсән:** Абруй һүҙен ихтирам һәм өлгө һүҙҙәре менән бутарға ярамай. Мәҫәлән, ҡайһы бер йәш йырсыларҙы, КВН-сыларҙы йәштәр кумир итеп ала, холоҡ-фиғелдәрен, үҙ-үҙен тотоштарын шуларға ҡарап үҙгәртә хатта. Улар өсөн был кешеләр өлгөгә әйләнә. Әммә йәш "йондоҙҙар" ошоно аңлап етмәй, ҡайһы берҙәре сәхнәлә бер төрлө һүҙ һөйләп, унан төшкәс, бөтөнләй икенсене эшләп йөрөй. Уларҙан өлгө алыусы, ихтирам итеүсе йәштәр ысынбарлыҡта уларҙың нисек булғанын күреп, төңөләүе лә бар бит.

**Айгөл:** Был "йондоҙҙар"ҙы абруйлы тип әйтеп булмаһа ла, йәштәрҙе арттарынан эйәртәләр икән, тимәк, ниндәйҙер дәрәжәлә ихтирамға лайыҡтар. Әммә улар тамашасы алдындағы сығыштары өсөн яуап биргән кеүек, тормошта ла яуаплы булырға тейештәр. Шулай ҙа, абруйлы кеше - ул һәр яҡлап та матур кеше, тип уйлайым.

**➔ Йәштәр өсөн өлгөлө тиҫтерҙәр булыуы мөмкин, тинегеҙ. Улай булғас, һеҙҙең ҡарамаҡҡа бөгөнгө замана геройы ниндәй?**

**Салауат:** Әҙәби әҫәрҙәрҙә сағылыш тапҡан шәхестәр кеүектәр, заман геройҙары булырлыҡтар беҙҙең тормошта ла бар ул. Ләкин беҙҙең яҙыусылар ҙа, драматургтар ҙа, ғөмүмән, йәмәғәтселек уларҙы күрмәй, иғтибар итмәй. Радио, телевидение, интернет аша тик аҡсаға ҡаныҡҡан, байлыҡ артынан ҡыуғандарҙы ғына күрһәтәләр. Көн дә ниндәй кеше күпме аҡса эшләгән, урлаған, кемде төп башына ултыртҡан, кемдән алданған һ.б. ошоға оҡшаш мәғлүмәттәр ишетеп үҫкән йәштәрҙең позицияһы ла тик аҡса эшләүгә, бөтөн нәмәне һатып алыуға ҡоролған буласаҡ. Беҙгә бит донъялағы төп капиталды үҙ ҡулында туплап тороусы байҙарҙың эшләгән аҡсаһының 70-80 процентын хәйер итеп төрлө фондтарға ебәреүе, ярлылар менән бүлешеүе тураһында һөйләмәйҙәр. Ә мин бына уларҙың ҡайһы берҙәре Африкала һыу торбалары һалдыра башлаған, тигән мәғлүмәт уҡығайным...

**Айбулат:** Заман геройының эштәре бер ниндәй уҫаллыҡһыҙ, эскерһеҙ булырға тейеш. Бөгөнгө көндә йәштәр араһында "заман геройы" исемен йөрөтөрлөктәрҙе белмәйем, әммә башҡорт халҡының һәр быуатта, ауырлыкта ла, еңеллектә лә, халҡы өсөн тырышҡан ҡаһарман ир-уҙамандары булған, улар буласаҡ, тип ышанам.

**Айгөл:** Элек заман геройҙары төрлө яуҙарҙы етәкләгән батырҙар, ихтилал башлыҡтары булған. Бөгөнгө заман геройы тыуған республикаһын, халҡын күтәргән кеше булараҡ күҙ алдына баҫа. Ул ниндәйҙер яу-алыштарҙы етәкләмәһә лә, милләттәштәренең, иленең мәнфәғәттәрен яҡлап көрәшкән замандаш.

**➔ Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында башҡорт милләтенең зыялылары тәрбиәләнә икәнен беләбеҙ. Шундай уҡыу йортонда белем алыу ауырмы?**

**Ләйсән:** Беҙҙең гимназияға уҡырға килергә теләгәндәр шуны белһен: беҙҙә туған башҡорт телендә һөйләшкән, тырыш, белемгә ынтылып торған, талантлы, лидер балалар уҡый.

**Салауат:** Һәр хәлдә, шулай булырға тейеш. Әммә дөрөҫлөктөң күҙенә тура ҡарайыҡ, Ләйсән: гимназиябыҙҙың башҡортлоғонан башҡорт теле дәрестәре һәм башҡортса үткән линейкалары ғына ҡалды түгелме? Ысынында, һуңғы өс-дүрт йыл эсендә ике баланың үҙ-ара башҡортса һөйләшеүен бик һирәк ишетергә тура килә. Беҙҙең уҡыу йортонон ғына бәләһе түгел был, әлбиттә. Башҡорт телен нөйөү тәрбиәләү, үҙ гөрөф-ғәҙәттәребеҙгә таянып йәшәргә өйрәтеү ғаиләлә башлана, шунда сикләнеп тә ҡала. Бала ғаиләнән тыш башҡорт мөхитенә эләкмәй тиерлек.

**Айгөл:** Ә шулай ҙа гимназиябыҙҙағы уҡыу-уҡытыу кимәленә әйләнеп ҡайтһаҡ, уҡытыусыларыбыҙҙың барыһы ла үҙ эшен яратып башҡарыусы профессионалдар, улар беҙгә үҙ балалары һымаҡ мөнәсәбәттә. Шуға күрә, беҙҙең гимназияла уҡыу үҙе бер кинәнес һәм ҡыуаныс. Төп дәрестәрҙән һуң төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнергә, конкурс һәм олимпиадаларҙа ҡатнашырға ла өлгөрәбеҙ. Былары иһә беҙҙе тағы ла нығыраҡ яҡынайта, туғанлаштыра.

**Айбулат:** Уҡытыусыларыбыҙҙың беҙгә белем биреп кенә ҡалмай, һәр береребеҙҙең артабанғы тормош юлы, һайлаясаҡ һөнәре, яҙмышы хаҡында борсолоуын, үҙ итеп хәстәрләүен тоя йөрөйбөҙ. Сығарылыш синыфҡа килеп еткәнсе улар менән "40 бот тоҙ ашаныҡ", тиергә лә була. Шуға ла үҙидара көнөндә беҙ шаяртып та, улар менән бергә үткән һынау юлына баһа билдәһе итеп тә, уҡытыусыларыбыҙға иң ҡиммәтле приз итеп 40 килограмм тоҙ бүләк иттек...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шәхес тәрбиәләү өсөн япондар балаларына биш йәше тулғансы бөтә нәмәне рөхсәт итә, бер ниндәй тыйыуһыҙ үҫтерә икән. Бындай тәрбиә алымы башҡорт халҡына хас түгел түгеллеккә, шулай ҙа балаларыбыҙҙың иркен фекерләүе, һәр һорауға ҡарата үҙ һүҙен еткерә белеүе һөйөнөрҙө. Һис шикһеҙ, был сифаттар ғаиләләге тәрбиәнән тыш, белем биреү усагында урынлашкан тәртиптән, уҡытыусыларҙың юғары профессионаллегенән дә киләләр. Нисек кенә булмаһын, әлеге балалар менән ололарса һөйләшеүҙең һөҙөмтәһе етди кешеләрҙе лә уйға һалырлыҡ булды, ахыры. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт?**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Был һорау юҡтан ғына килеп тыуманы һәм ул Герцендың "Кем ғәйепле?", Чернышевскийҙың "Нимә эшләргә?" романдары атамаһы буйынса хәҙер инде риторикка әйләнгән һорауҙар рәтенә баҫты. Сөнки мәғариф, аныҡлап әйткәндә, милли телдәрҙең, шул иҫәптән башҡорт теленең киләсәге тураһында мәсьәлә күтәрелгәндә, ғәҙәттә, киткән поезд составының артынан яулыҡ болғап тороп ҡалған кеүекбеҙ.**

# ПОЕЗДЫ ҠЫУЫП ТОТОРБОҘМО?

"Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында" законға өҫтәмәләр индереү мәсьәләһе буйынса ла, ниңәлер, поездың һуңғы вагонына өлгөрөргә тырышып, артынан йүгереп ҡарағайныҡ та, туҡтаманы, ҡәһәрең... Әле килеп, Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм фән министрлығының "Дөйөм урта белем биреүҙең белем биреү программалары буйынса дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үткәреү тәртибе"н раҫлаусы бойороғона нигеҙләнеп, Башҡортостан Мәғариф министрлығының аналогик бойороҡ сығарыуы, уға ярашлы, быйылдан башлап башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән аттестациялауҙы уҡыусыларҙың теләге буйынса үткәреү мәсьәләһе лә поезд киткәс кенә күтәрелгәндәй. Нисек кенә булмаһын, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Мәғариф һәм фән комиссияһы ултырышы шундай уйҙарға этәрҙе. Эйе, ултырышта белдерелеүенсә, РФ Мәғариф һәм фән министрлығының бойороғо субъекттарға, һәр хәлдә Башҡортостанға, бик һуңлап килә һәм шул сәбәпле беҙҙең министрлыҡ та аналогик бойороҡто белем усаҡтарына һуң ебәрә. Ә йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ҡолағына был хәбәр тағы ла һуңыраҡ төшә: шаушыу күтәрергә һуң, поезд инде ҡуҙғалған...

Әлеге ваҡытта республика буйынса башҡорт телен туған тел булараҡ уҡыған 9-сы класс уҡыусыларының 800-ҙән артығы (яҡынса 8 процент) башҡорт теленән диктант йәки изложение яҙыуҙы һайлаған. 11-се синыф уҡыусылары араһынан теләүселәр башҡорт әҙәбиәтенән билеттар буйынса телдән имтихан тапшырасаҡ. Ә инде артабанғы яҙмышын филолог һөнәре менән бәйләргә теләүселәр Берҙәм төбәк имтиханын һайлай.

Бында, әлбиттә, мәсьәләгә ике яҡлы ҡарарға була. Беренсенән, 9-сы синыфтар дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы өсөн мотлаҡ рәүештә рус теленән һәм математиканан имтихан тапшыра. Ә ҡалған предметтар араһынан - рус әҙәбиәте, физика, химия, биология, география, тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, сит телдәр (инглиз, немец, француз һәм испан), информатика һәм мәғлүмәт-коммуникация технологиялары (ИКТ), туған телдәр һәм әҙәбиәттәр - үҙе теләгән предметты һайлау хоҡуғына эйә. Әлбиттә, милли республика булараҡ, милли мәктәптәрҙә туған телдәр һәм әҙәбиәттәр буйынса имтихан мотлаҡ тапшырылырға тейеш кеүек. Әммә бында оптималь юл табыу зарур. Был йәһәттән, бәлки, Татарстан Республикаһы тәжрибәһенә эйәрергә кәрәктер? Моғайын, уларға ла Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығының шундай уҡ йөкмәткеле бойороғо һуңлап ебәрелгәндер, әммә улар бит бер ҙә аптырап ҡалмаған, тотҡандар ҙа 9-сы класс уҡыусылары өсөн мотлаҡ рәүештә татар теленән тест һынауҙары үткәргәндәр. Әлбиттә, һөҙөмтәләр аттестатҡа индерелмәй, уның ҡарауы, милли телде уҡытыуҙың, уҡытыусыларҙың эшенең һөҙөмтәһе асыҡ күренәсәк (быға тиклем милли мәктәптәрҙә туған телдәрҙән дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы мотлаҡ тапшырылып, уның һөҙөмтәләре аттестатҡа индерелә ине). Һәм был эш бары тик Мәғариф министрлығының (әллә ундағы телем, милләтем, тип янып-көйөп йөрөүселәрҙең ҡайһы берәүҙәренең фиҙаҡәрлеге менән генә мотлаҡ тип йөрөтөлдөмө икән?) инициативаһы менән генә тапшырыла килде. Бөгөн, күрәһең, туған министрлығыбыҙҙа ундай ватансыл кешеләр ҡалмаған...

Сара барышында, "быйылға дилбегәне ҡулдан ысҡындырҙыҡ. Киләһе уҡыу йылында февралдә үк министрлыҡтан 9-сы синыфтарҙа башҡорт теле буйынса дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын мотлаҡ тапшыртыуҙы талап итергә кәрәк", тигән фраза йыш ҡабатланды. Әгәр уҡыу йылы сентябрҙә башлана икән, был мәсьәләне ни өсөн февралгә ҡалдырырға һуң? Беренсе сентябргә килгәндә үк башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары 9-сы синыф уҡыусыларының үҙ предметын имтихан өсөн һайлаясағын ышаныслы белеп килергә тейеш түгелме икән? Юҡһа, йыл һуңында теләк белдереүсе уҡыусылар бөтөнләй булмауы ла ихтимал. Ә каникулдар - ул бары тик уҡыусы балалар өсөн, ә милли тел яҙмышының, милләт яҙмышының киләсәге өсөн ысын күңелдән борсолған зыялылар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре өсөн каникул да, ял да юҡ.

"РФ Мәғариф һәм фән министрлығының бойороғонда тағы (26.12.2013 й., №1400) бер сетерекле пункт бар: ул сит һәм туған телдәрҙән башҡа предметтарҙан имтихандарҙы рус телендә тапшырыуҙы күҙаллай. Был "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Закондың 14-се статьяһының 3-4-се пункттарына, йәғни балаларҙың туған телдә белем алыуға булған хоҡуғын сикләй, сөнки туған телдә белем алған балаға рус телендәге эштәргә тик рус телендә генә яуап биреүе ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырасаҡ", - тип белдерҙе БДБҠ башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Буранбай Күсәбаев.

Ләкин РФ Мәғариф һәм фән министрлығының ошонан бер көн алда сығарылған, әммә ғәмәлдә булған һәм Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығының сайтында дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын уҙғарыу буйынса норматив-хоҡуҡи документтар исемлегендә торған (әйткәндәй, был ике бойороҡ та бер үк көндә - 2014 йылдың 3 февралендә Юстиция министрлығында теркәү үтә, әммә 1400-сө бойороҡтоң теркәлеү һаны 31205, әле һүҙ алып барған 1394-се бойороҡтоң теркәлеү һаны 31206) 1394-се бойороғондағы алтынсы пункт "Белем биреү ойошмаһының уҡытыу планындағы инвариант өлөшөндәге уҡытыу предметы, был предметты РФ мәғариф һәм фән министрлығы башланғыс дөйөм, төп дөйөм, урта дөйөм белем биреүгә дәүләт аккредитацияһы булған мәғариф учреждениеларына ҡулланыуға тәҡдим иткән исемлеккә ингән дәреслектәр ҡулланып туған телдә уҡытылған осраҡта, дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы шулай уҡ туған телдә уҙғарыла" икәнлеген дәлилләй. Ә инде Башҡортостан Республикаһы министрлығының бойороғонда КИМ-дарҙы (имтихандарҙы контроль баһалау материалдарын - текстар, материалдар һ.б.) туған телдәргә тәржемә итеү бурысы ҡуйылған. Был йәһәттән, тимәк, ғәмәлдә проблема булырға ла тейеш түгел.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Дин белгестәре доғаларҙы ихлас күңелдән, уға барлыҡ күңеленде, өмөтөңдө һалып уҡыу менән исем өсөн генә уҡыу араһында ҙур айырма ятҡанлығын билдәләй. Кем алдындалыр, мин дә доғалар беләм, тип әйтер өсөн генә уҡылған доғаларҙан күңел сафланмай ҙа, тынысланмай. Ә инде бар ихласлығыңды һалып уҡығанда һин ысын мәғәнәһендә Аллаһ бәрәкәтендә булаһың, тиҙәр. Әгәр бөгөн башҡорт телен туған теле булараҡ уҡыған балаларҙың 8 проценты ғына имтихан тапшырыу өсөн әсә телен һайлаған икән, уйланырға урын бар. Һәм был осраҡта, сәбәптәрҙе асыҡлау өсөн, иң мөһиме балаларҙың үҙҙәренең фекерен белеү кәрәктер, моғайын. Сөнки риторик һорауҙар һаман да асыҡ ҡала: кем ғәйепле, нимә эшләргә, поезды ҡыуып тота алырбыҙмы?..**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

## СЕЛӘНМЕ, ҠАУҘЫМЫ?

**Йәш быуын, хатта беҙ, урта быуын кешеләре лә, ҡырағай йәнлек, ҡош-ҡорт, балыҡ, үҫемлектәрҙең башҡортса атамаларын белеп бөтөрмәйбеҙ.**

Мәҫәлән, русса "аист" тигән ҡошто "ҡауҙы" тиҙәр, ә "цапля" тигәнен "селән" тип атайҙар. Һүҙлектәрҙә лә, бер-береһенән күсерелтп, шулай килә лә килә. Был дөрөҫмө? Киреһенсә түгелме икән ул?

Атайым мәрхүм (1909 йылғы) оҫта һунарсы ине. Ул элек беҙҙең тирәлә күл, һаҙлыҡ күп булыуын, унда ҡыр өйрәктәре (беҙҙә үрҙәк тиҙәр), ҡауҙылар бихисап булғанлығын һөйләй торғайны. Беҙҙең яҡта (Көйөргәҙе районы) бер ҡасан да "аист" тигән ҡоштар булмаған, әле лә юҡ. Тимәк, атайымдың "ҡауҙы" тигәне ул "цапля" була. Ҡауҙыларҙың һыуҙа баҡа йотоп йөрөгәнен күреп беләбеҙ.

Ә бына "селән" тап "аист" тигән ҡоштоң башҡортса исемен аңлаталыр, тип уйлайым. Ул бейек ағас башында ҙур оя ҡора. Бәпестәрҙе лә селән "алып килә". Мин килен булып төшкән Ашҡаҙар буйында ла ҡауҙылар тулып йөрөй (һәр хәлдә, был ҡоштарҙы урындағы халыҡ шулай атай). Әммә ләкин улар һис тә "аист" түгел! Мин үҙем дә "аҡ селән" ("белый аист") тигән һүҙбәйләнеште уҡығаным бар, ә бына "аҡ ҡауҙы" тигәнде ишеткәнем юҡ. Был атамаларҙың буталғанлығы ошонан уҡ күренеп тора. **Ошо турала был ҡоштар йәшәгән яҡтарҙағы халыҡ, айырыуса оло йәштәге кешеләр, ни әйтер?**

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Тирмә эсе һәр ваҡыт шаршау менән икегә бүленә. Ишектән ингәс тә уң яҡ өлөш - ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы, һул, йәғни ҙурыраҡ яҡ ирҙәрҙеке тип һанала һәм ул ҡунаҡтарҙы ҡабул итеү яғы булып та тора. Тирмәнең түбәнге өлөшө ҡанаттары төрлө төҫтәге, сыбар, ситса йәки кизе туҡыма, һуғылған шаршауҙар, йөн балаҫтар менән биҙәлә. Был тирмәнен рәшәткәләре күренмәһен өсөн эшләнә. Бындай шаршауҙар өҫтөнән таҫтамалдар, ҡатын-ҡыҙҙарҙың мәрйен күкрәк биҙәүестәре, ә ишектән һул яҡта эйәрҙәр, башҡа ат егеү йыһаздары урынлаштырыла. Тирмә эсендәге ер кейеҙ менән ҡаплана, ҡайһы берҙә ҡамыш септә өҫтөнә балаҫтар йәйелә (һүрәт). Ишеккә ҡар-



шы стена буйында һандыҡ аяғына һандыҡ ултыртыла. Бай башҡорттарҙа уның өҫтөнә яҫтыҡ-мендәрҙәр өйөлөп, урын таҫмаһы менән бәйләп ҡуйыла. Һандыҡтарҙа ҡатын-ҡыҙҙарҙың барлыҡ кәрәкле әйбере - кейеҙ, балаҫтар һ.б. - һаҡлана. Һирәк кенә тирмәлә тәпәш аяҡлы карауаттарҙы ла осратырға мөмкин. Әлбиттә, был хужаның мөлкәте кимәленә бәйле. Ишектең уң яғында, шаршау артында махсус һауытта - һаба аяғында ғәҙәттә ҙур күн һаба тора һәм ул ҡымыҙ бешеү өсөн файҙаланыла. Ҡайһы берҙә уның урынын шул уҡ маҡсаттағы бер йә ике силәк биләй. Шунда уҡ ҡорот яһау өсөн тәпән тора. Төрлө ағас, күн һауыт-һаба, самауыр менән сынаяҡтар һәм башҡа хужалыҡ кәрәк-яраҡтары урынлаштырла. Хужаның ике тирмәһе йәки тирмәһе һәм уҡбаш ҡыуышы булғанда, уларҙың береһендә, яңырағында, ғаилә башлығы үҙе йәшәй һәм шунда уҡ ҡунаҡтар ҡабул ителә; икенсе тирмәлә иһә ғаилә ағзалары йәшәй һәм унда көнкүреш кәрәк-ярағы һаҡлана.

В. М. Черемшанский яҙыуынса, һәр тирмә уртаһында ерҙе соҡоп аҙыҡ әҙерләү һәм кискеһен яҡтылыҡ сығанағы булһын өсөн махсус ут яғыу урыны әҙерләнә. Әммә XX быуат башында бындай усаҡ урынын бары тик һыуыҡтар башланғас, көҙ көнө генә күрергә тура килде. Тауҙарҙа тирмә эсендә аҙыҡ бешереү өсөн эшләнгән усаҡ һәм уның өҫтөнә яһалған ылашты бик һирәк күрергә мөмкин булды. Бөтөн ерҙә лә аҙыҡ әҙерләү өсөн тәғәйенләнгән усаҡтар тышҡа сығарылған, ә тирмә эсе кәрәсин лампа ярҙамында яҡтыртыла ине.

Йәйләүҙә тирмәләр бер рәткә теҙелеп, мал уларға яҡын килмәһен өсөн бер нисәһе бергә йәки барыһы бергә кәртәләнеп алына. Яланда кәртә бик һирәк ҡуйыла.

Хәҙер ваҡытлы торлаҡтың дүрт мөйөш формаһындағыларын ҡарайыҡ. Улар араһында аласыҡ киң тарала. Ул ҡыуыш кеүек үк төрлө материалдан төҙөлә. Аласыҡ ике төргә бүленә: күсереп йөрөтөү мөмкин булғаны һәм күсерелмәгәне. Күсерелеп йөрөтөлгәне дүрт йүкә бағананан тора һәм ағас нигеҙгә һалабаш ярҙамында беркетелә. Һәр ғаилә йәйләү урынында ошо стеналарҙы йыйып, аласыҡ ҡора; ҡабыҡтарҙың ос яҡтары бөгөлөп, бергә беркетелә һәм ҡыйыҡ барлыҡҡа килтерә. Аласыҡтың бер яғына тар ғына ишек ҡуйыла.

✓ ***Карьера эшләү өсөн һинең гуманитар йәки техник өлкәлә эшләүеңдең айырмаһы ла юҡ. Эшләргә теләгең булһа, кешеләр менән мөнәсәбәт ҡора алһаң, яуаплы, һығылмалы булһаң, һине теләһә ниндәй һөнәргә өйрәтеп алалар.***



# НИНДӘЙ ҺӨНӘР

## Халҡыңа файҙа

**Хәҙер үҙеңә оҡшаған һөнәр һайлауы еңелдән түгел. Интернет, техника ныҡ үҫешкән заманда көн һайын тиерлек ниндәйҙер профессияның, хатта бер-нисә һөнәрҙең кәрәге бөтә, улар урынына яңылары барлыҡҡа килә. Шуға ла йәш кешегә һөнәр һайлауы ла ауырлаша бара. Ошонда 17 йәшлек Карл Маркстың үҙенең сығарылыш иншаһында яҙған бер фекерен телгә алғы килә. Йәш Маркс һөнәр һайлағанда шәхсән мәнфәғәтте, йәки матди файҙа алыу ихтыяжын ғына алға ҡуйыуҙы тәнҡитләй. Бөгөн дә йәштәребеҙ ошо маҡсатты ғына күҙҙә тота түгелме? Унан һуң, һуңғы йылдарҙа башҡорт йәмәғәтселегендә балаларға күберәк техник өлкәләге белем бирергә кәрәк, тигән фекер киң таралыу алды. Әлбиттә, гуманитар белем генә шәхес, милләт үҫешенә туранан-тура йоғонто яһай, тип һанаусылар ҙа бар. Бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ - "Банкос" компанияһы директоры Рәүеф ӘЛМӨХӘМӘТОВ һәм сәйәсәт фәндәре кандидаты Әхтәр БОҪҠОНОВ менән ошолар тураһында һөйләшәбеҙ. Әңгәмәне иҡтисад фәндәре кандидаты, даими авторыбыҙ Илдар ҒӘБИТОВ алып бара.**

▸ **Милли республикала милли мәктәптәр булырға тейеш, балаларыбыҙҙың туған телдә белем алыуы ла мотлаҡ. Әммә мин үҙем юғары кластарҙа математика, физика һымаҡ фәндәрҙе башҡортса уҡытыу менән бик үк килешеп етә алмайым. Мәктәпте тамамлап, юғары уҡыу йортона уҡырға ингәс, уларға был фәндәрҙәге терминдарҙың руссаһын яңынан өйрәнергә тура килә түгелме? Ғөмүмән, был мәсьәләгә һеҙ нисек ҡарайһығыҙ?**

**Р. Әлмөхәмәтов:** Мин был ҡараш менән ҡырҡа килешмәйем. Сөнки үҙем дә 7-се класҡа тиклем тыуған ауылымда - Ҡырмыҫҡалы районы Түбәнге Төкөн мәктәбендә физиканы ла, математиканы ла, башҡа фәндәрҙе лә башҡорт телендә уҡыным. Өфөләге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға килгәс, математика менән физика - русса, ә ҡалған предметтар башҡортса уҡытылды, әммә руссаға күсеүҙең бер ҡыйынлығын тойманым. Ете йыл туған телемдә уҡыуыма ныҡ ҡәнәғәтмен, фекерләргә, шул фекерҙәрҙән сығып, дөрөҫ һығымталар яһарға өйрәндем. Әгәр тәүҙә үк русса уҡырға мәжбүр ителһәм, башҡорт телендә аралашып үҫкән ябай ауыл малайы булараҡ, тәүҙә уҡытыусының русса һорауын тыңларға, унан һуң башҡортсаға тәржемә итеп, мәсьәләнең айышына төшөнөргә, аҙаҡ фекеремде руссаға тәржемә итеп, яуап ҡайтарырға тейеш булыр инем. Белемде үҙ телемдә төплө итеп алғанға күрә, аҙаҡ русса терминдарҙы аңлап алыу бер ҙә ҡыйынлыҡ тыуҙырманы.

**Ә. Боҫҡонов:** Мин Әбйәлил районы Ишбулды ауылында тыуғанмын, Хәлилдә, башҡорт мәктәбендә белем алдым. Өсөнсө кластан һуң күрше ауылға йөрөп уҡыныҡ. Әйткәндәй, йәйәү йөрөп уҡығаныбыҙға ҡыуанып бөтә алмайым, дүрт саҡрымды йәйәү үткәнбеҙ, тимәк, физик сынығыу ҙа алғанбыҙ. Ә хәҙерге балаларға ҡарағыҙ - 100 метрҙы ла йәйәү йөрөгөләре килмәй. Тел тураһындағы һорауға килгәндә, Рәүеф Вәхит улының фекерен хуплайым. Мәктәптә бөтөн фәндәрҙе лә башҡорт телендә уҡығас, башҡортса фекерләйем. Әммә теләһә ниндәй аудитория алдында шул белемемде файҙаланып, русса сығыш яһайым. Унан һуң, русса һәр кем сығыш яһай ала, һин үҙеңдең туған телеңдә сығыш яһап ҡара! Бына был бөгөн күптәр өсөн иң ауыр мәсьәлә. Мин БДУ-ның Сибай институтында төрлө дәрестәр алып барам, һәм йыш ҡына дәрестә материалды башҡорт телендә аңлатам, терминдарҙы ғына русса бирәм. Сығышы менән ауылдарҙан булған студенттарым минең лекцияларҙы рәхәтләнеп тыңлай, күңеленә һеңдерә. Һәр хәлдә, туған телдәге мәғлүмәт уларҙың белем нигеҙен байытасаҡ, нығытасаҡ ҡына, тип уйлайым, ә телде белмәгәндәр өйрәнә.



***7-се класҡа тиклем тыуған ауылымда - Ҡырмыҫҡалы районы Түбәнге Төкөн мәктәбендә физиканы ла, математиканы ла, башҡа фәндәрҙе лә башҡорт телендә уҡыным. Өфөләге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға килгәс, математика менән физика - русса, ә ҡалған предметтар башҡортса уҡытылды, әммә руссаға күсеүҙең бер ҡыйынлығын тойманым. Ете йыл туған телемдә уҡыуыма ныҡ ҡәнәғәтмен, фекерләргә, шул фекерҙәрҙән сығып, дөрөҫ һығымталар яһарға өйрәндем. Әгәр тәүҙә үк русса уҡырға мәжбүр ителһәм, тәүҙә уҡытыусының русса һорауын тыңларға, унан һуң башҡортсаға тәржемә итеп, мәсьәләнең айышына төшөнөргә, аҙаҡ фекеремде руссаға тәржемә итеп, яуап ҡайтарырға тейеш булыр инем.***

▸ **Һөнәрҙе кем һайларға тейеш? Бала үҙеме, әллә атаәсәме?**

**Ә. Боҫҡонов:** Бала өлгөрөп етеп, үҙе һайлаһа - шул һөнәренә тоғро ҡала һәм уның мәғәнәһен аңлай, файҙаһын күрә, быныһына шик юҡ. Тик бында тағы бер нәмә бар. Беҙҙә йыш ҡына балаға һөнәрҙе атаәсә һайлай, сөнки бөгөнгө 17 йәшлектәр ҙә, хатта 21 йәшлек институт тамамлаған йәштәр ҙә бала һымаҡ, йәғни, шәхестең социаль өлгөрөүе бөгөн бик һуңлап килә. Күптәре 30 йәшкә еткәс кенә ғаилә ҡорорға ҡарар ҡыла. Был нимә тураһында һөйләй? Беҙҙең халыҡтың элекке өлгөрөү ваҡыты менән бөгөнгөһө араһында айырма ғәйәт ҙур. Элек, тарихтан күренеүенсә, беҙҙең халыҡ вәкилдәре 15-16 йәштә социаль яҡтан өлгөрөп еткән. Мәҫәлән, Бабич 24 йәшендә дошмандар тарафынан үлтерелгәндә халҡына үлмәҫ йырға әйләнгән шиғырҙар ҡалдырған оло шағир булған.

▸ **Д. П. Никольский тигән рус этнографы "Башкиры: этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" тигән китабында: "Башҡорттарҙың башы ҙур, шуға улар математикаға һәләтле..." - тип яҙған. Ысынлап та, милләтебеҙҙә теүәл фәндәргә һәләтле балалар бихисап, әммә уларҙың бөтәһе лә ниңәләр техник йүнәлешле факультеттарға барырға ашыҡмай һымаҡ?**

**Р. Әлмөхәмәтов:** Бала теүәл фәндәргә тартылһын өсөн уҡытыусыларҙың роле лә мөһим. Мәҫәлән, ауылда беҙҙе математиканан Сәлимйән Хәсәнов исемле бик көслө уҡытыусы уҡытты. Талапсан уҡытыусы хәйләле генә берәй һорау бирә, класс көсөргәнешле уйлай, күпмелер ваҡыттан һуң йә беребеҙ, йә икенсебеҙ яуап бирә башлай, ул дөрөҫ яуап биреүсегә "бишле" ҡуя бара. Беҙ был уҡытыусының дәрестәрен, тимәк, математика фәнен дә ярата торғайныҡ. Шуға беҙҙең ауылда белем алған балалар математиканан уңышлы уҡыны, аҙаҡтан руссаға күсеүҙә лә ҡыйынлыҡ тойманы. Тимәк, башҡорт балаларының математикаға, башҡа теүәл фәндәргә һәләтен асыусы ошондай уҡытыусылар кәрәк мәктәптәргә.

**Ә. Боҫҡонов:** Ҡөрьәнгә таянып, Ислам ғалимдары әйтә: кәрәк белем һәм кәрәкмәгән белем бар. Беҙгә тәүҙә кәрәк белемде үҙләштерергә кәрәк. Шулай итмәһәк, кәрәкмәгән белем башыбыҙҙағы буш урынды үҙе яулап ала. Балалар менән ошо юҫыҡта шөғөлләнмәһәк, улар башын кәрәкмәгән белем менән тултырасаҡ. Эйе, бынан 20 йыл элек математика формулаларын, терминдарын белеү кәрәк булғандыр ҙа. Бөгөн компьютер заманы. Хәҙер миңә математика кәрәкмәй ҙә һымаҡ. Шуға, киңерәк алып ҡарағанда, карьера эшләү өсөн һинең гуманитар йәки техник өлкәлә эшләүеңдең айырмаһы ла юҡ. Эшләргә теләгең булһа, коллективта үҙеңде тота белһәң, кешеләр менән мөнәсәбәт ҡора алһаң, яуаплы, һығылмалы булһаң, һине теләһә ниндәй һөнәргә өйрәтеп алалар.

Шуныһы ла бар: һөнәр алған кешеләр араһында бик аҙҙары ғына үҙенең шәхси мәнфәғәтенән милләт һәм халыҡ мәнфәғәтен юғары ҡуя. Күпселек: "Миңә был белемдең матди файҙаһы булырмы?", "Ошо һөнәр менән күпме аҡса эшләрмен, күпме өй төҙөрмөн, күпме машинам булыр, байырмынмы?" - тип фекерләй. Һөнәр һайлағанда бер ниндәй ҙә идеологик күрһәтмә-кәңәштәр бирелмәй, шуға ла йәштәр һәм уларҙың ата-әсәләре иң тәүҙә шәхси мәнфәғәтен ҡайғырта. "Мин ниндәй өлкәлә халҡыма файҙа килтерә алам?" тигән кешеләр кәрәк беҙгә бөгөн. Бындай кешеләр техник йүнәлешле һөнәрмәндәр араһында ла, гуманитарийҙар араһында ла булырға мөмкин. Ҡыҙғаныска күрә, техник фәндәр йүнәлешендә уҡығандар араһында милләт мәнфәғәте өсөн янғандарҙы һирәк осратырға тура килә. 90-сы йылдарҙы ғына алып ҡарайыҡ: республика суверенитеты өсөн көрәш ваҡытында митингыға кемдәр сыҡты? Кемдәр мәҡәләләр яҙҙы? Кемдәр телевидениенан, радионан, матбуғат баҫмалары биттәрендә сығыш яһаны? Беҙҙең гуманитарийҙар - журналистар, яҙыусылар, тарихсылар, ғалимдар, сәнғәт кешеләре. Халыҡтың ихтыяжын тәрән аңлаған кемдәр араһында күберәк булды? Шул уҡ профессорҙар, тарихсылар, философтар менән бергә ябай ауыл халҡы, уның зыялылары алға әйҙәне. Шуның өсөн, иң тәүҙә балаларҙа рух тәрбиәләргә кәрәк. Рухты туған тел, туған әҙәбиәт дәрестәрендә генә түгел, туған телдә уҡытылған тарих, география дәрестәрендә лә тәрбиәләп була. Мәктәптә рус телендә уҡып, уйныулыҡтан - ҡалҡыулыҡты, аҡландан яланды айырмай, башҡортса оҙонлоҡ үлсәмдәрен белмәй икән, ул кеше телде насар белә, тигән һүҙ, һәм шул сәбәпле ул туған телендә аралашмай башлай.

Ғөмүмән, кешегә аралашҡанда ҡулланыр, фекерләү һәләтен үҫтерер өсөн бер тел дә етә. Ике телде лә бер кимәлдә камил белгән кешеләр бик аҙ. Бына миңә ике телдә лә һөйләшеүе еңел, сөнки 18 йәшкә хәтлем тик башҡортса, артабан утыҙ йылға яҡын русса аралашам. Шуға ла мин аудиторияһына ҡарап, башҡортса ла, русса ла һөйләй алам. Әммә күптәр улай итә алмай: мәктәптә көнө-төнө русса аралашалар, хәҙер ауыл мәктәптәрендә хатта тарихты ла рус телендә уҡыталар.

**Р. Әлмөхәмәтов:** Мин балаларыбыҙҙы математика кластарында, әммә башҡортса уҡытыу яғында. Күп йыллыҡ тәжрибәм шуны күрһәтә - математика класын тамамлаған бала үҙе ҡайҙа теләй, шунда - техник йә гуманитар өлкәгә уҡырға бара ала. Был балаларҙың яҙыусы, рәссам, музыкант булып китеүе лә ихтимал. Гуманитар класта белем алғандар тик ошо өлкәгә генә бара ала.Шуға ла милләтебеҙгә техник өлкәлә белем алырға кәрәклеге менән мин дә килешәм.

▸ **Математикаға һәләтле башҡорттар, ниңәлер, гел гуманитар өлкәне һайлай торғайны шул элек. Шул арҡала беҙҙең милләт вәкилдәре эшҡыуарлыҡ өлкәһенә лә бик үтеп инә алманы. Әллә совет власы башҡорттарҙы махсус рәүештә мәҙәниәт өлкәһенә бороп ебәрҙеме икән?**

**Ә. Боҫҡонов:** Совет осорон нисек кенә тәнҡитләмәйек, тап совет власы башҡортто милләт итеп һаҡланы. Әгәр совет власы, автономиялы республикабыҙ булмаһа, 100 йыл буйына телебеҙ рус теленең бер өләшөнә әйләнеп, беҙ уны юғалтҡан булыр инек. Советтар ваҡы-

***✓ Хәҙер күп йәштәребеҙ, Исламда милләттәр юҡ, тип дәлилләй башлай. Дингә һылтанып, еребеҙгә килмешәк булып килгәндәр ерле халыҡ булырға ынтыла. Һәр халыҡтың милләте бар, был ерҙә башҡорт хужа.***

тында башҡорт телендә ижад иткән радио, театр, филармония асылды, башҡорт мәктәптәре эшләне, башҡортса китаптар сыҡты, йәғни, милләтте яңыртыу процесы һәр ваҡыт барҙы. Һәр милләт дәүләт ҡурсауы тойҙо, һәр быуын үҙенең үҙаңын һаҡлай алды. Быны бер нисек тә инҡар итергә ярамай. Тимәк, быға тиклем милләтте һаҡлауға гуманитар өлкә ҙур йоғонто яһаны.

70-80-се йылдарҙа техник белем алыуҙың фәтеүәһе бар ине әле. Дәүләт милли составты тотоп килде, кадрҙар һайлағанда милли составты көйләне. Бөгөн иһә бөтөн дәүләт милке эшҡыуарҙарҙың шәхси ҡулына күсеп бөткән мәлдә хәл башҡараҡ. Бөгөн һинең белемең ниндәй булыуы бөтөнләй мөһим түгел. Эшҡыуар өсөн башҡортмо һин, башҡа милләттәнме - барыбер, эшлә генә. Шуға мин махсус рәүештә милләтте бөтөрөү планы эшләнәләр, тип уйламайым. Әйткәндәй, эшҡыуарҙар араһында йөрөйөм,

# ҺАЙЛАРҒА?

## килтерерлеген!

уларҙың рус милләтенән булғандары башҡортҡа ихтирам менән ҡарай.

Хәҙерге эшҡыуарҙар араһында техник белемлеләр күберәк, тигән ҡараш бар. 90-сы йылдарҙа дәүләт ҡарамағындағы предприятиелар шәхси ҡулдарға күскән ваҡытта беҙ, ысынлап та, артта ҡалдыҡ, сөнки әҙерлекле завод директоры, баш инженерҙарыбыҙ булманы. Күптәр ул йылдарҙа юғары урында, ресурс, акциялар бүлешкән ерҙә булып, тиҙ байып китте. Йәғни, бөгөн бизнес бүлешеп алып бөтөлгән. Шуға ла техник белем алыу ғына һиңә унда юлды аса, тип уйларға ярамай. Тимәк, техник белемле булһаң да, гуманитарийға ла нимәлер эшләү өсөн үҙеңә тырышырға кәрәк.

**Р. Әлмөхәмәтов:** Эшҡыуарлыҡты алып барыу өсөн техник белемең булыуы мотлаҡ. Бизнестың уңышлы барыуының төп нигеҙе - техник белем һәм тәжрибә. Мин бизнесымды 90-сы йылдарҙа башланым. Ул дәүерҙә закондар аҙ, формаль булмаған мөнәсәбәттәр ҙә күп ине. Ләкин эш тә күп ине. Әгәр шул эште табып, эшләргә ҡурҡмаһаң, уңышҡа өлгәшеү мөмкинлеге ҙур булды. Әлеге көндә эш юҡ, бизнес баҙары бүлеп алынған, ҡайҙалыр әләгеп китеүе ныҡ ауыр. Мең йәш кеше эшҡыуарлыҡ башлай икән, уларҙың 999-ы уңышһыҙлыҡҡа осрай. Шунан улар, эшҡыуарлыҡ яман нәмә икән, ти ҙә, чиновник булырға ҡарар итә. 24 йыл бизнестамын, йыш ҡына мәктәпкә балалар алдында сығыш яһарға саҡыралар. 90-сы йылдарҙа бөтөн балалар ҙа тиерлек бизнесмен булырға хыялланды. Йылдан-йыл был теләк менән яныусылар һаны кәмерәк була барып, хәҙер балалар: "Мин чиновник булам", "Мин көс органдарында эшләйем", "Минең һалым органдарында эшләгем килә", - ти. Сәбәбе - йәмғиәттә эшҡыуарлыҡҡа ҡарата кире ҡараш булыуы. Быйның субъектив һәм объектив яҡтары шул хәтлем күп. Эшләүе ауырайыуын да танырға мәжбүрмен. Был өлкәлә үҙгәртә торған нәмәләр ҙә бар. Мәҫәлән, Европаның алдынғы илдәрендә ҙур бер ойошма эргәһендә бәләкәй компаниялар эшләп килә. Ҙур майҙанлы бинаның урта өлөшөндә ниндәйҙер завод урынлаша икән, уның тирәһендә төрлө хеҙмәтләндереү функцияларын үтәгән бәләкәй компаниялар урын ала. Был бәләкәй компаниялар үҙ эшен еренә еткереп башҡарғанға күрә, завод етәкселеге уларҙың эшенә ҡыҫылмай, мәҫәлән, урам һепереү, иҙән йыуыу кеүек эштәр тураһында борсолмай ҙа. Был аутсорсинг тип атала. Рәсәйҙә лә шуны индергәндә, бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа юлдар асылыр ине. Юғиһә, беҙҙә бер гигант завод үҙ территорияһындағы бар эштәрҙе лә үҙе башҡара.

**▸ Математиканан формулаларҙы белһәң, һинең русса белеү-белмәүең әллә ни ҙур роль уйнамай. Әгәр ҙә иҡтисад һымаҡ фәндәрҙән русса телең аҡһаһа, бик хөрт. Ғөмүмән, беҙҙә башҡортса уҡытыу, русса уҡытыуға бер-нисә йыл һайын ҡараш үҙгәреп тора. Шул үҙгәрештәр, ниндәйҙер реформалар менән беҙ балаларға насар йоғонто яһамайбыҙмы?**

***Өсөнсө кластан һуң күрше ауылға йөрөп уҡыныҡ. Әйткәндәй, йәйәү йөрөп уҡығаныбыҙға ҡыуанып бөтә алмайым, дүрт саҡрымды йәйәү үткәнбеҙ, тимәк, физик сынығыу ҙа алғанбыҙ. Ә хәҙерге балаларға ҡарағыҙ - 100 метрҙы ла йәйәү йөрөгөләре килмәй. Тел тураһындағы һорауға килгәндә, Рәүеф Вәхит улының фекерен хуплайым. Мәктәптә бөтөн фәндәрҙе лә башҡорт телендә уҡығас, башҡортса фекерләйем. Әммә теләһә ниндәй аудитория алдында шул белемемде файҙаланып, русса сығыш яһайым. Унан һуң, русса һәр кем сығыш яһай ала, һин үҙеңдең туған телеңдә сығыш яһап ҡара! Бына был бөгөн күптәр өсөн иң ауыр мәсьәлә.***

**Р. Әлмөхәмәтов:** Беренсенән, уҡыу - ул төп белем алыу, шунан һуң уйларға өйрәнеү. Мәҫәлән, мин Урал политехник институтын тамамланым. Беҙ күп кенә русса терминдар менән эш иттек, уларҙы бөгөн дә аңлайышлы, матур итеп һөйләп бирә алам. Әммә унда уҡыуымдың мәғәнәһе шунда - мине уйларға, тикшеренергә өйрәттеләр. Бөгөн яңы төшөнсәләр килеп сыҡһа ла, мин уларҙы үҙаллы бик еңел өйрәнә алам. Шулай булғас, бер йыл - русса, икенсе йыл башҡортса уҡыныҡ, тигәнде лә ыңғай яҡҡа әйләндергем килә: башлы, уйлай белгән кешегә былтыр - башҡортса, быйыл - русса, өсөнсө йыл тағы башҡортса уҡыуҙың бер зыяны юҡ, киреһенсә, уның башы тағы ла нығыраҡ, яҡшыраҡ эшләйәсәк.

**Ә. Боҫҡонов:** Бала русса белем алһа, яҡшы була, ул Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа китә, тип әйткәнде йыш ишетәм. Күпме ата-әсә балаһын ошоға өндәй. Уйлап ҡараһаҡ, Башҡортостандан ситкә киткән балаларҙы беҙ юғалтабыҙ. Мәскәүҙә уҡыған йәштәрҙең 3-5 проценты ҡайтыр ҙа, бәлки. Рәүеф Вәхит улы ни өсөн иркенләп, ныҡ баҫып йөрөй? Сөнки ул - ауыл кешеһе. Уның йылғаһы, күле, ауылы, урамы бар. Тәпәш кенә өй ҙә күп ҡатлы йортҡа ҡарағанда ҡәҙерлерәк уға. Милли интеллигенциябыҙ Өфөлә, тибеҙ ҙә шул, әммә нигеҙҙәре ауылдан айырылған өфөләләрҙә барыбер подъезд үҙаңы һаҡлана. "Подъезд тәрбиәһе" тигән термин да уйлап сығарғайным. Ҡала балаһының шул подъездан башҡа бер нәмәһе лә юҡ. Тамырҙары ауылда булғандарҙың йылғаһы, тауы, туп тибеп йөрөгән ере бар. Ҡайҙа барһам да, былар үҙем менән йөрөй. Ә ҡала балаһының күңелендә нимә йөрөһөн? Подъезд да, уның тышында ултырған ике сүпсар һауыты. Бына уның тыуған иле. Милли интеллигенция тип уларға



таянырға тырыша ла халыҡ, әммә алда әйтелгән сәбәптәр арҡаһында интеллигенция вәкилдәре үҙҙәре милләткә нимә кәрәклеген аңламай, сөнки улар милли мөхиттән айырылған, быуындар бәйләнешен юғалтҡан.

Белем алыу, йәштәр тураһында һөйләшкәндә, тағы бер фекеремде әйтәйем әле. Ата-бабаларыбыҙ белемгә ныҡ ынтылған. 60-70-се йылдарҙа Өфөгә, Магнитогорскиға килеп, белем алырға тырышҡандар. Сөнки ул ваҡытта телевизор, интернет, радио юҡ, ауылда иҫке генә китаптар ҙа әҙ, кеше булыр өсөн ҡайҙалыр белем алырға кәрәк. Бөгөн беҙ бөтөнләй икенсе мөхиткә күстек, әммә шуны аңлап етмәнек, һаман инерция буйынса, нисек булһа ла юғары белем, диплом ал, тип өйрәтәбеҙ балаларға. Элек ата-бабаларға балаларын уҡытырға кәрәк ине, сөнки уларға мәғлүмәт етмәне. Бөгөн, киреһенсә, әгәр баланы тәрбиәләйбеҙ, тиһәк, мәғлүмәтте сикләргә тейешбеҙ, сөнки хәҙер баланы беҙ түгел, көнөтөнө килгән шул мәғлүмәт тәрбиәләй. Был насар ҙа түгел ул, практик рәүештә алып ҡарағанда, бөгөнгө йәштәр беҙҙең быуынға ҡарағанда алдынғы ҡарашлыраҡ. Әммә йыш ҡына уларҙа тыуған ил, тыуған ер, ата-әсә алдында бурыс төшөнсәһе юҡ.

**▸ Йәш быуынды туған телендә уҡытып ҡына был проблемаларҙы хәл итеп булырмы икән һуң?**

**Ә. Боҫҡонов:** Әгәр ҙә башҡортса һөйләшкән, үҙен башҡорт тип иҫәпләгән кешеләр булмаһа, башҡорт башҡа берәй милләттең бер өлөшөнә әйләнәсәк. Шуның өсөн генә булһа ла мәктәптәрҙә башҡорт телендә белем биреү мөһим. Былай ҙа милләтебеҙгә төрлө хәүефтәр янап ҡына тора. Мәҫәлән, һуңғы ваҡытта күптәр дингә килә башлағайны, хәҙер күп йәштәребеҙ, Исламда милләттәр юҡ, тип дәлилләй башлай. Дингә һылтанып, еребеҙгә килмешәк булып килгәндәр ерле халыҡ булырға ынтыла. Һәр халыҡтың милләте бар, был ерҙә башҡорт хужа. Үҙен башҡорт тимәй, рус тип йөрөтөүселәр араһында күпме кеше шиғыр яҙа, күпмеһе рус мәҙәниәтенә хеҙмәт итә? Юҡ улар. Күпселек йәштәребеҙ ана шулай ике милләттең уртаһында тора ла ҡала.

Йә беҙ үҙебеҙ милләт булып ҡалабыҙ, йәки йотолабыҙ, урталыҡта тороп ҡалыу юлы юҡ. Милләттең булыуы Конституциябыҙҙан да бигерәк, һәр кемдең башҡортлоғон таныуынан да тора. Тарихыбыҙҙы һөйләп, башҡорт икәнлегебеҙҙе аңлатып, милләтте тергеҙеп, яңыртып тормаһаҡ, 20-30 йыл аморф хәлендә йәшәгәндән һуң, милләтен бөтөнләй онотҡан бер төркөмгә әйләнәсәкбеҙ.

Әгәр йәмғиәт күмәк аң төшөнсәһен юғалта икән, милләт юғала, тигән һүҙ. Бөгөн бар донъяла шәхестең индивидуалләшеүе көсәйә бара. Минең фекеремсә, индивидуалләштереү коллективизмды үлтерә, сөнки уларҙың икеһе бергә йәшәй алмай. Индивидуализм нисек була һуң, тиерһегеҙ. Күҙ алдына килтерегеҙ, һәүетемсә генә йәшәп ятаһың, дәғүәсең менән аралашып йәшәйһең, бергә ашап-эсеп йөрөргә лә мөмкинһең. Әммә конкурентлы өлкә килеп сыҡтымы - үҙең тере ҡалырға, дәғүәсеңде тапарға тырышаһың. Килемле урындар өсөн көрәш проблемаһы - һәр йәмғиәткә хас күренеш, был һәр ваҡытта ла булған.

Мин индивидуалләшкән кеше насар, улар милләткә хеҙмәт итмәй, тип әйтмәйем. Күп кенә милләттәштәребеҙ, әйтәйек, Эльбрус Нигмәтуллин, Ләйсән Үтәшевалар ситкә китеп, дан ҡаҙаналар. Әммә уларҙың үҙ милләтенән булған кеше менән ғаилә ҡороп, башҡортса һөйләшә белеүе лә кәрәк. Шул саҡта ғына башҡортлоҡ дауам ителәсәк, әммә бөгөн Башҡортостанда ла, ауылдарҙа ла, ситкә киткәндәр араһында ла башҡорттар иҫәбе кәмей. Милләттең юғала барыуының беренсе этабы инде был. Иң тәүҙә туған телендә һөйләшмәгән, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихын белмәгән, йырламаған-бейемәгән быуын барлыҡҡа килә. Милләттең юғала барыуының икенсе сәбәбе - халыҡтың ҡалаға ағылыуы. Икенсе быуындың балалары - мәҙәниәтте йөрөтөүселәр түгел, әммә уны дауам итәләр. Улар ҡурайҙа уйнамай, йырламай, әммә башҡортса аңлай. Өсөнсө быуында башҡортлоҡ генетик хәтерҙә генә һаҡлана. Минең атайым сығышы буйынса башҡорт булған, тиҙәр. Дүртенсе быуында - милләт йәшәүҙән туҡтай.

Беҙ Рәсәй составында йәшәйбеҙ, дәүләт беҙгә үҙ телебеҙҙә аралашыу мөмкинлеген бирә. Әммә халыҡтың үҙ милләте алдында яуаплылығы булыуы шарт. Эске потенциалы тип әйтергә лә була уны. Шул булмаһа, бер ниндәй закон да, президент та халыҡты яҡлай алмаясаҡ, уны халыҡ үҙе генә булдыра ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙгә йыш ҡына төрлө тараftан һорауҙар яуҙыралар. Шундай һорауҙарҙың беҙҙе аптыратҡаны, мәҫәлән, шул булды: "Башҡортса белмәһәм дә, мин - эшҡыуар, баймын, башҡортса белгән анау ағай - эскесе һәм ярлы. Тимәк, мин ул эскесенән түбәнерәк булып килеп сығаммы?". Ана шундай һорауҙарға бер-ике һүҙ менән генә яуап биреүе ауыр булғаны өсөн дә, бөгөнгө әңгәмәлә ошондай һорауҙар яңғыраны һәм беҙ уларҙы гәзитебеҙ биттәренә сығарырға йөрьәт иттек. Һәр кем уйланһын, ойоғандар "уянһын" өсөн. Һорауҙар һәм яуаптар төрлөсә булыуы мөмкин, әммә дөрөҫлөк бер генә. Бөгөнгө әңгәмәлә ошо дөрөҫлөк ниндәйҙер кимәлдә сағылыш тапҡандыр, тип ышанғы килә.**

**Әңгәмәгә
Илгиз ИШБУЛАТОВ
ҡушылды
һәм яҙып алды.**

✓ ***Ярҙамға, тигәс тә, ниндәй генә ярҙам булһын инде ул сибек ҡыҙҙан. Ысынында, егетте үҙ кәүҙәһе менән ҡапланы. Ә теге хулигандар, ҡыҙҙың арағa төшөүен күргәс тә, шып туҡтанылар.***






Ғәлимйән өйгә төн уртаһы үткәс кенә ҡайтып инде. "Ашығыс ярҙам" дауаханаһының хирургия бүлеге мөдире булып эшләгән улының йыш ҡына шулай эштән һуңлап ҡайтыуына күнегеп бөткән әсәһе Рәхилә тиҙ генә кухняға инеп, ашын йылытырға ҡуйҙы. "Кискә ҡарай ғына бер берәҙәк бабайҙы килтерҙеләр", тине Ғәлимйән, ҡулын таҫтамалға һөртә-һөртә.

- Әйҙә, улым, асыҡҡанһыңдыр, ултырып ашай башла, - әсәһе улының яратҡан һалмаһын тәрилкәгә һалып, уның алдына ҡуйҙы. - Бомждар бөтмәҫ инде ул... Мин һине Зөһрә янында булып, һуңлап ҡайтаһыңдыр, тигән өмөт менән көтһәм әле...

- Юҡ, әсәй, Зөһрә ҡайғыһы булманы бөгөн...

- Зөһрә ҡайғыһы, тип ни... Утыҙ икенсе йәш менән бараһың бит инде, - бушай һалған тәрилкәгә тиҙ генә аш өҫтәй-өҫтәй, әсә кеше һаман үҙ яғын ҡайырҙы. - Тиҫтерҙәрең әллә ҡасан башлы-күҙле булып бөттө...

- Йә, ярай инде, әсәй, быйыл йәйгә өйләнәм, тинем бит инде. Тыңла әле, баяғы бомж...

- Аһ-аһ, кемгә ниндәй операциялар яһауың хаҡында элегерәк һорашһам да бер ауыҙ һүҙ ала алмай инем бит...

-Был хаҡта бөтөнләй һөйләмәҫ инем, әсәй, әммә был бик ҡыҙыҡ осраҡ: бабайҙың барлыҡ эске ағзалары киреһенсә урынлашҡан.

-Киреһенсә?

- Эйе, ҡапма-ҡаршы яҡта. Йөрәге, талағы - уң яҡта, бауыры, һуҡыр эсәге - һулда. Талағы икенсе яҡта булыуы диагностика процесын бер аҙ ҡатмарлаштырҙы.

- Ни булған һуң ул меҫкенгә?

- Кемдер типкеләп туҡмаған, ахырыһы. Талағы ярылған һәм эсәк араһына ҡан тулған. Ундай кешеләр, ғәҙәттә, үҙенең йәшәгән подвалында ғына ятып йән бирә. Ә быны кемдер осраҡлы ғына күреп, ашығыс ярҙам саҡыртҡан...

- Оло кешеме?

- Төҫөнә ҡарағанда етмеш йәштәр тирәһе бирергә була. Әммә берәҙәк халҡының ул йәшкә етеүе лә икеле. Йәше түгел, хатта исем-фамилияһы ла билдәһеҙ. Дауаханаға килтергәндә, күп ҡан юғалтыуҙан, иҫһеҙ ине инде. Кеҫәһендә лә ҡатҡан икмәк һыныҡтары ғына, бер документы ла юҡ.

- Ниндәй милләт кешеһе икән? - тип ни өсөндөр ҡыҙыҡһына башланы Рәхилә.

- Был хаҡта ниҙер әйтеүе ҡыйын, тик уң ҡулы һыртындағы "Миша" тигән яҙыуына ҡарап, Михаил исемле урыҫ кешеһелер, тип фаразларға ғына була. Әммә йөҙө башҡортҡа оҡшаған. Сәсе, һаҡалы ап-аҡ, бөҙрә...

Бөҙрә... Рәхилә үҙенең бөҙрә сәсле улына ҡарап, күпмелер ваҡытҡа тынып ҡалды.

- Әле мин операциянан сығыуға атайым шылтыратты, - тине Ғәлимйән бер аҙҙан. - Командировкаһы тамамланған. Ҡайтырға сығыуы тураһында әйтте.

Яратҡан атаһы хаҡында әсәһе менән һөйләшеүҙе әллә ни күрә ул. Шуның өсөн дә һәр саҡ теленән төшөрмәй яҡын кешеһен. "Атайым шулай тигәйне...", йә иһә "Атайым менән кәңәшләшергә кәрәк..." тигән һымағыраҡ һөйләшеүҙәр була һәр саҡ улар араһында.

- Ә?.. Атайың?.. - Рәхилә насарыраҡ ишеткән кеше һымаҡ, ҡабатлап һораны.

- Эйе, әсәй, атайым. Таңға өйҙә булырмын, тигәйне. Яратҡан былауын бешереп әҙерләп ҡуй инде, - тине Ғәлимйән әсәһенә бушаған тәрилкәһен һуҙып. - Аш шундай тәмле, телемде йота яҙҙым...

Һөнәре буйынса ла кулинар булған Рәхилә һәр төрлө тәмтомдо ысынлап та "теленде йоторлоҡ" итеп әҙерләй. Йыш ҡына улының яратҡан ашын - башҡорт һалмаһын бешерә. Магазиндан алынған туҡмасмаҙарҙы Ғәлимйәненең өнәп етмәгәнен белә. Ә ире Фитрат былауҙы өҫтөн күрә. Үҙенең яратҡан ошо ике кешеһенә лә мөмкин тиклем ярарға тырыша хужабикә. Әле кәстрүлдә аш етерлек булыуына ла, инде төндөң таңға ауышыуына ла ҡарамай, хәҙер үк, әлбиттә, былау бешерергә тотонасаҡ ул. Улы, йә иренең ул әҙерләгән аштарҙы ихласлыҡ менән ашауҙарынан ниндәйҙер ҡәнәғәтлек кисерә. Әле лә өҫтәп һалып биргән ашты Ғәлимйәненең аппетит менән "төйгәнен" рәхәтләнеп ҡарап ултыра. Улының атаһы хаҡында ҡайғыртыуы ла күңеленә май һымаҡ булып ята уның. Иренең ҡайтырын, әлбиттә, унһыҙ ҙа белә ине... Һәләтле хирург, профессор, медицина фәндәре докторы булған Фитрат Хәйбулловичты Республика дауаханаһындағы төп эшенән һәм университетта дәрес биреүҙән тыш, йыш ҡына ана шулай сит яҡтарға ла консультацияларға саҡыралар. Әле ул Чебоксарға киткәйне.

Атанан күргән - уҡ юнған, тигәндәй, улдары Ғәлимйән дә бала саҡтан доктор булырға хыялланып, үҫеп еткәс, медицина университетына уҡырға инде. Студент сағынан уҡ атаһы менән бергә дежурҙарға йөрөп, һәр төрлө, хатта ҡартмарлы ғына операцияларҙың да нескәлектәренә шаҡтай төшөнөп алғайны. Ә инде табип дипломы алғанда Ғәлимйән, башҡа йәш врачтарҙан айырмалы, өлгөргән хирург ине инде.

Улы үҙенең бүлмәһенә йоҡларға инеп киткәс, былау бешергес һауытҡа ит турап, газ плитәһе өҫтөнә ҡуйҙы ла, йәнә уйға батты Рәхилә. Утыҙ йылдан ашыу ире менән икеһенә генә мәғлүм булған оло бер серҙе башҡаларҙан, шул иҫәптән үҙенең улынан да йәшереп йөрөүҙәре күңелен өйкәй уның. Әлегерәк, Ғәлимйәнe бала саҡта, был хаҡта ул хәтле үк уйланмай ҙа торғайны. Әле генә улынан ишеткән яңы хәбәр уны сираттағы мәртәбә үҙенең күңелһеҙ йәшлеген хәтерләргә мәжбүр итте.

* * *

...Авиация инситутының дөйөм ятаҡтарынан алыҫ булмаған ерҙә әллә ҡайҙан күренеп торған һәйкәл янында танышты улар. "Танышыу" тип атап булһа әгәр. Студенттар үҙҙәре "Три богатыря" тип атап йөрөткән ҙур ғына өс революционер һыны янына ҡайһы бер ял көндәре тансыға йыйыла торғайнылар. Кулинария училищеһында уҡып йөрөгән Рәхилә лә әхирәте Гөлмәрйәм менән, кейенеп-яһанып, бер көндө ошонда килде. Ғәҙәттә, улар Салауат һәйкәле янына барыуҙы хуп күрәләр. Тик был юлы Гөлмәрйәм ни өсөндөр өгөтләп, уны тап ошонда алып килде. Яҙмыштыр, күрәһең. Улар килгәндә йәштәр байтаҡ ҡына йыйылғайны. Тик һәйкәл янында ҡыҙҙарҙы музыка түгел, ә ниндәйҙер шау-шыу, сәрелдәшкән тауыштар ҡаршы алды. "Өс батыр" янында егеттәр һуғыша ине. Дөрөҫөрәге, өс егет берәүҙе типкеләй. Йыйылышҡан бер төркөм егеттәр туҡмалыусыны яҡлашырға яҡын барырға ҡыймай, үҙҙәренең шөрләгәнен "ҡурҡаҡ" ҡыҙҙарға белгертмәҫкә тырышып, тәмәкеләрен тарта-тарта, бер ни ҙә булмағандай ҡарап торалар. Һуғыш ни менән бөтөрөн көтөп, бер ҙә иҫе китмәй генә торған егеттәр өсөн, йәнәһе, был "ғәҙәти хәл"... "Ярҙам итегеҙ!" тип ҡысҡырышҡан ҡыҙҙарҙың тауыштары һауаны яра... Башы-күҙе, күлдәге ҡанға туҙған бөҙрә сәсле егеттең башҡорт икәнен әллә ҡайҙан төҫмөрләргә була. Рәхилә килеп еткәс тә "Үлтерәһегеҙ бит, йыртҡыстар, туҡтағыҙ!" тип, бар көсөнә ҡысҡырып, башын типкеләүҙәрҙән йәшереп ҡулдары менән ҡаплап йомарланып ятҡан егеткә ярҙамға ташланды. Ярҙамға, тигәс тә, ниндәй генә ярҙам булһын инде ул сибек ҡыҙҙан. Ысынында, егетте үҙ кәүҙәһе менән ҡапланы. Ә теге хулигандар, ҡыҙҙың арағa төшөүен күргәс тә, шып туҡтанылар. "Слышь, чубак кудрявый, ты этой бабе жизнью обязан, запомни!" тине араларынан береһе. Урыҫ егеттәре булдымы, башҡалармы, әммә уларҙың ҡаланыҡылар икәне әллә ҡайҙан беленә ине. Һуғыш туҡтағанын ғына көткәндәй, мигалка һәм сиренаһын ҡабыҙып, милиция машинаһы килеп етте. Әммә теге өс егеттән елдәр иҫкәйне инде. Күк төҫтәге УАЗтан төшкән бер-нисә сержант теге хулигандарҙы эҙәрлекләп тә тормаҫтан, етеҙ генә йүгерешеп килеп, иң тәүҙә ҡанға туҙған "бөҙрәкәй"ҙе эләктереп алды. Ҡулдарын шаҡарып, машиналарына ҡарай алып китә башланылар. "Ул ғәйепле түгел, уны хулигандар туҡманы!" тип тағы арағa төшөп маташҡан Рәхиләне бар тип тә белмәнеләр. Башҡалар был юлы ла егетте яҡлашып алып ҡалырға ҡыйманы. Әллә ниндәй таныш булмаған кешене яҡлашып, уның арҡаһында бәләгә тарыуҙан ҡурҡтылар, әллә ни... Әммә, Рәхиләгә был егет бик тә йәл тойолдо. Әхирәтенең айвайына ҡарамай, теге егеттең артынан милиция машинаһына инеп ултырып китте. Лейтенанттың "А это еще кто такая?" тигән һорауына "Свидетель" тип кенә яуап ҡайтарҙы ҡыҙ.

Милиция булегенә барғас, дежурныйҙың бүлмәһенә алып инделәр. Йөҙө ҡарағыһыҙ булып ҡанға батҡан егеттән тәүҙә ниндәйҙер көпшәгә өрҙөрөп ҡаранылар. Көпшәләге реактив йәшел төҫкә ингәс тә сержант йәнләнеп китте. "Пьяный, вдупль, че скажешь..." тине коллегаһына. Егеттең допроста ни һөйләгәнен Рәхилә ишетмәне, сөнки уларҙан һорауҙы айырым-айырым алдылар. Бер аҙҙан уның исем-фамилияһын да белде.

- Авиация институты студенты Яҡшығолов Миңсәит - һинең туғаныңмы? - тип һораны дежурҙа ултырған пеләш башлы капитан.

- Юҡ, - тине Рәхилә, - танышым...

-Танышың ләяҡыл иҫерек бит, - тине дежурный бик етди ҡиәфәт менән. - Беҙ уны бөгөн сығара алмайбыҙ. Айнытҡыста төнәргә тура килер...

- Иптәш милиционер, ул ғәйепле түгел. Уны хулигандар туҡманы, тип күрһәтмә биргәйнем дә инде мин!

-Ҡыҫҡаһы, ҡыҙыҡай, бар, өйөңә һыпырт. Иртәгә килерһең. Юғиһә, үҙеңде лә камераға бикләп ҡуясаҡбыҙ...

- Ә теге хулигандар ҡасып киттеләр...

- Уныһы - беҙҙең эш. Телеңә һалынып торма, тай бынан, йәһәтерәк!.. Әйткәндәй, әгәр танышыңдың институттан ҡыуылып сығыуын теләмәһәң, иртәгә таң менән, сәғәт һигеҙҙән дә алдараҡ килергә тырыш. Егерме биш һум штраф аҡсаһын да алып килергә онотма. Әгәр минең дежурство бөтмәҫ элек алып килеп өлгөртһәң, егетең ҡотолдо, тип уйла, протоколды үҙеңдең күҙ алдында йыртып ташлаясаҡмын. Килеп өлгөрмәһәң - үҙеңә ҡарап үпкәлә. Хуш...

Ул саҡтағы егерме биш һум хатта студенттан былайыраҡтар өсөн дә байтаҡ ҡына ҙур аҡса ине (хәҙерге аҡса менән сағыштырғанда бер велосипедлыҡ сумма ла булғандыр әле). Тәүҙәрәк ҡул һелтәргә лә уйлағайны Рәхилә, аҙаҡ тағы теге Миңсәитте йәлләне. Һис бер ғәйепһеҙ кешегә тиктомалдан уҡыуҙан ҡыуылып сығыу ҡурҡынысы янай бит. Етмәһә, авиация институтынан. Анһатмы унда инеүҙәре... Бар таныштарынан бишәр, өсәр һумлап әйтелгән сумманы йыйып өлгөрҙө Рәхилә. Ул ғына ла түгел, иртәнге һигеҙенсе яртыла күҙ төптәре күгәреп шешенгән, әммә йылмайыуҙан ауыҙы ҡолаҡтарына еткән Минсәит менән улар трамвай туҡталышында элекке таныштарҙай көлөшә-көлөшә һөйләшәләр ине инде. Кисә ни өсөн һуғышып киткәндәрен егет нишләптер һөйләргә теләмәне. Рәхиләнең һорауына "Тик, былай ғына..." тигән яуап булды. Ҡыҙ башҡаса уның яраһын ҡуҙғатҡыламаны. Был хәл шуның менән тамамланды.

Рәхиләнең ифрат та һылыу төҫ-башына, күптәрҙең күҙе төшөрлөк буйы-һынына күрше ҡаланан килеп, баш ҡалала уҡып йөрөгән Миңсәит битараф ҡала алманы. Көн дә тиерлек кулинария училищеһының дөйөм ятағына килә торған булып китте. Егеттең ата-әсәһе аҡсалы урында эшләй ине буғай. Яңғыҙ улдарынан бер нәмә лә йәлләмәгәндәре һиҙелә. Ул саҡтағы студент халҡына әллә ни хас булмаған ҡыйбатлы кейеменә, һәр төрлө ашамлыҡ-эсемлеккә аҡсаһын иркенләп тотоноуына ҡарағанда, тап ана шулай тип фаразларға була ине. Сибәр ҡыҙҙың йөрәген яулап алыуға бөтә көсөн һалды Миңсәит. Дөйөм ятаҡҡа матур гөлләмә тотмайынса килгәне һирәк ине уның. Үҙенә ҡарата шундай иғтибарҙы, үтә лә йылы мөнәсәбәтте егеттең саф мөхәббәте итеп ҡабул итте ябай ауыл ҡыҙы. Башҡортса әйткәнде аңлап, әммә урыҫ телендә генә һөйләшкән был егет тә, күҙе-башындағы шешектәре, күктәре ҡайта башлау менән, Рәхиләгә оҡшай төштө. Һәр төрлө матур, яғымлы һүҙҙәр менән бик тә әҙәпле һөйләшә белгән Миңсәит, әкренләп, ҡыҙҙың күңеленә ныҡлап үтеп инде. Ҡуйы ҡара ҡашлы, сөм-ҡара күҙле, тура танаулы, ҡара мыйыҡлы, оҙон буйлы, киң яурынлы был егет Рәхиләнең хыялындағы образға тап килә ине... Бөҙрәһе үҙе генә ни тора! Тора-бара ҡыҙ уға ысынлап та "үлеп" ғашиҡ булды ла ҡуйҙы. Йөҙөндәге күктәренән арынғас та, осрашыуға йыш ҡына еңелсә хәмер еҫе менән килгәненә лә иғтибар итмәне ғишҡынан башы әйләнгән ҡыҙ. Ә Миңсәит уны үҙенең тәмлетатлы һүҙҙәре менән һыйланы ла һыйланы. Шул мәл үҙенең "оригиналь" кеше икәнен дә әйтте уға.

- Минең һымаҡ кеше Башҡортостанда ғына түгел, ә бәлки, бөтә Рәсәйҙә лә бер-нисә генә, - тине ул мут йылмайып.

- Ни яғың менән айырылаһың һин башҡаларҙан? - Егеттең һүҙҙәрен саманан тыш шапырыныу тип ҡабул итте Рәхилә.

- Минең йөрәгем уң яҡта урынлашҡан, - тип Рәхиләне аптыратты егет тағы. - Ышанмаһаң, бына, тыңлап ҡара... Ә һуҡыр эсәгем менән бауырым һул яҡта... Бала сағымда аппендицит менән сирләп киткәс, хирургтар бик оҙаҡ һуҡыр эсәгемде тапмай йөҙәгән...

Ә инде танышыуҙарына өс-дүрт ай үтеүгә, институттың өсөнсө курсында ғына уҡып йөрөүенә ҡарамаҫтан, Рәхиләгә өйләнергә теләгән белдерҙе Миңсәит. Үҙе саф мөхәббәт хистәре менән янған, үҙенә ҡарата егеттең дә шундай уҡ эскерһеҙ һөйөүенә бик тә ышанған ҡыҙ "Ысынлап яратмаһа, өйләнергә уҡ тәҡдим яһамаҫ ине", тип уйланы.

Бер көндө Миша (танышҡан көндөн иртәгәһенә уҡ үҙен шулай тип атап йөрөтөүен үтенгәйне) Рәхиләне дөйөм ятаҡтағы үҙенең йәшәгән бүлмәһенә ҡунаҡҡа алып ҡайтты. Мишаның бүлмәләш иптәштәре ҡайҙалыр киткәйне. Ихтимал, егет был хаҡта алдан уҡ үҙе хәстәрләп ҡуйғандыр...

- Тик ЗАГС-тан һуң ғына, - тине Рәхилә йәнәшәһендә ултырған егетенең сираттағы мөртәбә саманан тыш иркенләп киткән ҡулдарын кире этәреп. - Әйткәндәй, өйләнеүеңә ата-әсәң ҡаршы булһа?..

- Бөйөк илебеҙ коммунистик дәүләт төҙөп ятҡан дәүерҙә, әллә ҡасан уҡ сереп бөткән капитализм заманынан ҡалған ундайбындай иҫке йолалар буйынса йәшәү беҙҙең кеүек современный кешеләргә, өҫтәүенә, комсомолецтарға хас булырға тейеш түгел. - Аяғөҫтө баҫып, Миша кинәт тантаналы рәсми тонға күсте. Шаян күҙҙәрен көлдөрөп, кинофильмдарҙағы Ленин бабайға оҡшата биребераҡ, уң ҡулын юғары күтәреп дауам итте: - Беҙҙең илдә никах мәсьәләһен йәштәр тик үҙҙәре генә хәл итергә тейеш... Ә икенсенән, - яңынан Рәхиләнең янына килеп ултырҙы. Ҡыҙҙың күҙҙәренә ҡарап, сәстәренән назлап иркәләне. - Икенсенән, йәнем, минекеләр бер ҡасан да бер нәмәгә лә ҡаршы килмәйҙәр, үҙ йәйма ҡуялар. Быныһ өсөн һис тә борсолма, - тине егет ярым шыбырлап.

- Ә нишләп үҙеңдең шундай матур исемеңде боҙоп, "Миша" тип йөрөтәһең? - тине Рәхилә һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа борорға тырышып. Егеттең уң ҡулының һыртындағы татуировка яҙыуын һыйпаны.

-Киләсәктә үҙенә еңелерәк булһын өсөн, - тип ҡосаҡлап алды егет ҡыҙҙы. Минең исемде әйтәм тип, теленде һындырып ҡуймаһын өсөн... - Бер ҙә ауыр түгелсә, - тиген булды Рәхилә унын ҡосағынан ысҡынаһы килмәй генә. - Миңсәит... Ә минең ҡайҙа һинең?

- Әйтмәйем...

- Ни өсөн?

- Сөнки ул әйтергә ярамаған урында урынлашҡан. Тик ни өсөн атайым менән әсәйем шул исемде ҡушҡандарҙыр...

Икәүләшеп һындары ҡатҡансы көләшеп алдылар. Шул кисте, ифрат та оҫта телле Миша берәһенән-берәһе татлыраҡ һүҙҙәр һөйләп, тау-тау вәғәҙәләр биреп, тамам ҡыҙҙың башын әйләндерҙе. Күпме генә тырышып ҡарамаһын, бешкән сейәләй өлгөрөп, дәрте ташып барған ҡыҙ үҙенең хистәренә ҡаршы килә алманы...

**(Дауамы бар).**

*ЗАУЫҠ*

# ҠОЛДАР ТҮГЕЛ БӨГӨН, ҠОРҘАШТАР БЕҘ,

## Ҡорло йортта беҙҙең ҡотобоҙ

*Мөнир ИҠСАНОВ*

### Ҡарға бутҡаһы

Кескәй генә сағым.
Тәтәү мине
Алып сыҡты яҙғы яланға.
Ҡарға бутҡаһына беҙ барабыҙ,
Хөрмәт ҡылып, яҙғы йолаға.

Ауыл халҡы, ҡорға йыйылышып,
Табын йәйҙе йәшел үләнгә.
Табын йәме түгел,
Тормош йүне
Һеңгән бит ул минең күңелгә.

Үҙ алдына мине ултыртты ла
Бутҡа һалып бирҙе тәтәүем,
Шул ваҡытта бутҡа тәмен түгел,
Тормош тәмен бит мин татыным.

Ҡарға ашаһын, тип, тәтәү менән
Бутҡа һалдыҡ ҡайын төбөнә.
Шул аш өсөн һаман,
Юҡ, ҡош түгел,
Яҙмыш бит ул һаман һөйөнә.

Яҙғы сәхрәләрҙәй күкрәп бөгөн
Сәскә ата ғүмер яланым.
Сөнки бик күптәнән тәтәү миңә
Асып биргән йәшәү йолаһын.

### Майҙан

Украина ерен күргәнем юҡ,
Таныш түгел миңә милләте.
Әммә бөгөн, гүйә, кисерәмен
Кисергәнде бөйөк Нигмәти.

Ағиҙелем тулҡынланып ҡуя,
Ауаз һала Урал тауҙары.
Йәнә, йәнә ҡанһыҙ көрәш ҡубып,
Тетрәгәндә Киев Майҙаны.

Майҙан булып минең йөрәгем дә
Ҡап уртаға ҡалды ярылып.
Бер яртыһы, унда дөрөҫлөк, ти,
Һулдар хаҡлы, ти бер яртыһы.

Йөрәк кенәме ни, бар Ер шары
Ҡайнап тора оло Майҙандай,
Майҙандағы халыҡ алдана һәм
Майҙандағы халыҡ мандымай.

Саф туғанлыҡ тигән төйөн менән
Бәйле ерҙә бөтә кешеләр.
Ҡулдар сисә алмаҫлыҡ шул төйөнгә
Кемдәр тағы ҡылыс төшөрә?

Кемдәр күтәрмәксе тыуған илен
Башҡа милләт көнө хаҡына,
Ил ҡайғыһы менән янмаҫ улар,
Аямаҫтар тыуған халҡын да.

Киев Майҙанында атһын ҡабат,
Атһын Туғыҙынсы Май таңы!
Ағиҙелгә, Уралтауға һөйөнөп,
Тынысторор Салауат майҙаны.

### Миндәк

Алтын да ғына мәғдән ҡалҡып сыға,
Ҡуйындарын асһа Миндәгем.
Илемә семтем байлыҡ бирһә икән
Йөрәгемдән сыҡҡан мәғдәнем.

Миндәгемә килеп һөйөнәмен,
Һыуҡайҙары тулы яр булһа.
Миндәгем дә миңә йәмле булмаҫ,
Халҡым хәс-кеүәте тар булһа.

Миндәк һылыуына күҙем төштө
Үткән генә саҡта һыу юлын.
Бирнә итеп илдәр бирһәләр ҙә,
Сит халыҡтың алмам һылыуын.

Миндәк үҙәнкәйе тәрән түгел,
Уртаһына ҡәҙәр керһәм дә.
Миндәк ағышына бошонмайым,
Ир күңеле китһен тәрәнгә.

Миндәк һыуы ҡайҙа ҡоя, тиһәң,
Ағып төшә данлы Яйыҡҡа,
Ниҙәр генә ҡылыр данлы халҡым,
Башҡорт улының рухы һайыҡһа?..

### Ҡырым

Ҡырҡ тарафҡа таралғанда илдәр,
Тороп ҡалды Ҡырым сит ҡырҙа.
Ҡапыл ҡолға әүерелмәҫ өсөн
Ҡайтты Рәсәй тигән киң ҡорға.

Тыуған Уралымды тиңләмәйем
Йыраҡтағы ярымутрауға.
Тик борон да Рәсәй, ҡорҙаш булып,
Ҡулын һуҙған шулай Уралға.

Ҡолдар түгел бөгөн, ҡорҙаштар беҙ,
Ҡорло йортта беҙҙең ҡотобоҙ.
Ҡолло йортҡа ғына боролмайыҡ,
Ҡабатланмай ҡалһын хатабыҙ.

Аяҡ аҫтындағы ғәзиз ерем
Яҡын тормай алыҫ Ҡырымға.
Әммә ерен, телен һөйгән өсөн
Күпме йылдар халҡым ҡырылған!

Башҡорт көсө менән ун етелә
Яңы Рәсәй ҡоро ҡоролдо.
Яңғыраймы бөгөн башҡорт һүҙе,
Ишетәме был ҡор Уралды?

Ырғыҙ, Барҙы, Ҡоншаҡ, Ҡыуандыҡтар
Юҡ, йәшәмәй Ҡырым хәлендә.
Үҙ халҡынан ләкин айырылған,
Айырылған туған теленән.

Һирәгәйә ҡорҙа кәңәш ҡороу,
Йыш бирелә түрҙән бойороҡ.
Үҙ ҡарашы булған ҡорҙаштарға
Күрһәтелә ҡаты йөҙороҡ.

Диңгеҙ буйындағы Ҡырым түгел
Урал төбөндәге ҡырҙарым.
Ҡырҙарымды ләкин бер уйлаһам,
Тәрәнәйә йөрәк һырҙарым.

Ҡолдар түгел бит беҙ, ҡорҙаштарбыҙ,
Ҡорло йортта беҙҙең ҡотобоҙ.
Ҡоробоҙға кире Ҡырым ҡайтты,
Ҡабатланмай ҡалһын хатабыҙ.

*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...*

# ИЛ ҺАҒЫНҒАН ҺИНЕ, САЛАУАТ!

**Хатип Фазыловтың "Төш" тигән картинаһына ҡарап ултырҙым да, рассам әҫәре тураһында түгел, тормошобоҙ хаҡында уйландым әле.**



Республикабыҙҙың исеме бар, есеме юҡ. Конституциябыҙ - Рәсәй Конституцияһы күсермәһе, дәүләт телебеҙ иҫәпкә бар, һанға юҡ. Етәкселәр тураһында әйтергә лә түгел, Баймаҡтың Баймағында йәшәүселәр балалары, ейәндәре менән башҡорт телендә һөйләшмәгәс инде. Исмаһам, башҡортса гәзит-журналдар алдырһаларсы. Телевидение-радионы тыңлаһаң, тағы ла иҫең китә. Ир йырсы башҡорт халыҡ йырын йырлағанда эргә-тирәһендә ҡыҙҙар йөрөй шәрексә бейеп, кендектәрен күрһәтеп. Ҡатын-ҡыҙ йырсылар араһында ла бар сәхнәгә ярымшәрә сығыусылар. Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар бик тыйнаҡ булған бит, ни эшләп хәҙергеләрҙә юҡ шул сифат?

Журналистар һөйләгәндә, яҙғанда телдәрен һындырып бөтәләр. "Русса әйткәндә", "әммә ләкин" кеүек яңы һүҙбәйләнештәр мейегә ҡаҙала хатта. Бөрйән районында күренгән күренеште монар, мираж тип яҙҙы гәзиттәр. "Мираж" - ул сағым, "монар" - ҡаҙаҡ далаларында йәйге эҫе ваҡытта күктә томан һымаҡ эленеп торған саң. Шул яҡтан иҫкән ел бөтөн үләнде көйҙөрөп бөтә лә инде. Әйтелгән фекерҙәремә шиғыр ҙа өҫтәйем әле:

### Төш

*Төштә күрҙем бөгөн бер егетте.*
*"Һин кем?" - тинем,*
*Әйтте: "Салауат!"*
*"Иҫәнһең дә инде, эй, батырым,*
*Ил һағынған һине, әйҙә, ҡайт!"*
*"Башҡорт рухы, теле һүнгән ергә*
*Юҡ, ҡайтмайым, - тине егетем.-*
*Ғорурлығын, илен һаҡлай алған*
*Эстон халҡын хәҙер уҙ иттем.*
*Һеҙҙең хәлде елдәр еткерәләр,*
*Ниңә түбән төшөп киттегеҙ?*
*Тышаулы ла көйө саба алмай,*
*Толпарымды бында илтегеҙ..."*

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**
**Баймаҡ районы**
**2-се Әтҡол ауылы.**

*✓ "Аҡыллы" һөнәр эйәләре иң яҡшы һөҙөмтә күрһәткән. Баш мейеһе ҡартайыуын әкренәйткән һөнәрҙәр исемлегендә тәүге биш урынды авиадиспетчерҙар, табиптар, финанс аналитиктары, ғалимдар, педагогтар биләй.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘТЕР НАСАРАЙЫУЫ...

## йәштәр сиренә әйләнә бара

■ Йәшәү кимәле юғары булған илдәрҙә йәшәүселәрҙең ғүмер оҙайлығы күберәк, һаулығы ла яҡшыраҡ, әммә иң бай илдең дә оло кешеләре хәтер насарайыуы менән яфалана. Ғалимдар раҫлауынса, өлкән йәштә лә теүәл аҡыллы булып ҡалыуға кешенең йәмғиәттәге статусы, байлығы түгел, ә даими рәүештә уйлау, фекерләү талап ителгән эштә эшләүе ярҙам итә. Эше стандарт булмаған мәсьәләләрҙе хәл итеү менән бәйле булғандар хаҡлы ялға сыҡҡас та юғары менталь статусын һаҡлап ҡала. Колорадо университеты ғалимдары төрлө һөнәр эйәләрен тикшергән, уларҙың барыһы ла бер генә эш урынында оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткән. "Аҡыллы" һөнәр эйәләре иң яҡшы һөҙөмтә күрһәткән. Баш мейеһе ҡартайыуын әкренәйткән һөнәрҙәр исемлегендә тәүге биш урынды авиадиспетчерҙар, табиптар, финанс аналитиктары, ғалимдар, педагогтар биләй.

■ Белгестәр хәтер насарайыуының йәштәрҙә лә йыш осрай башлауы хәүефен белдерә. Бигерәк тә 30 йәште үткәндәрҙә был күҙәтелә. Башлыса кешеләр өйҙән сығып киткәндә ой-ок кейергә, күҙлек йәки асҡыс алырға, дөрөҫ яҙыу ҡағыҙәһен, ПИН-кодтарҙы онота. Тикшеренеүҙә ҡатнашыусы кешеләрҙең 6 проценты йәш кеше була. Шулай уҡ күптәр хәтер насарайыуынан, уны юғалтып ҡуйыуҙан ҡурҡып йәшәй икән. Уларҙың һаны 31 процентты тәшкил иткән.

■ Эрл Грей - бергамотлы сәй йөрәк һәм ҡан тамырҙары эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай. Ғалимдар билдәләүенсә, ул холестерин кимәлен күбәнәйтә. Бергамоттың составындағы энзимдар йөрәк ауырыуҙарына килтерә торған аҡһымдарҙы юҡҡа сығара. Гидрокси метилглутарил флавонондар атамаһы аҫтында билдәле булған был энзимдар "насар" холестеринға ҡаршы көрәшә, етмәһә, уларҙың кире эффекты ла юҡ. Билдәле булыуынса, көнөнә 5 сынаяҡ ҡара сәй эсеү яман шеш үҫешен түбәнәйтә. Быға сәйҙәге флаваноидтар булышлыҡ итә.

■ Кешенең ғүмер оҙайлығы төрлө факторҙарға: йәшәү рәүешенә, генетикаға, йәрәхәттәр һәм ауырыуҙарға бәйле. Ғалимдарҙың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, кемдең күпме йәшәүенә унын холҡо ла йоғонто яһай. Даими күңел төшөнкөлөгө, стрестар йәшәү оҙайлығын ҡыҫҡартыусы төп сәбәптәр булып тора. Һөҙөмтәһенә йоғонто яһай алмаған хәл-ваҡиғалар тураһында бөтөнләй борсолорға ярамай. Эргә-тирәләге кешеләргә ышанмау, уларға шикләнеп ҡарау, уларҙы хөкөм итергә ынтылыу ҙа кешенең ғүмерен ҡыҫҡарта. Белгестәр раҫлауынса, асыҡ кешеләр оҙағыраҡ йәшәй.

■ Йорт хайуандары кеше һаулығының торошона яҡшы тәьҫир итә, ти белгестәр. Европа университеттары ғалимдары йорт хайуандары ярҙамында стрестан ҡотолорға, хатта психиканы нығытып, иммунитетты ла яҡшыртырға мөмкин, тип дәлилләй. Медиктар фекеренсә, бесәйҙе бер нисә минут буйына һыйпау баш ауыртыуынан ҡотолдора. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә алынған статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, өйҙәрендә эте йәки бесәйе булғандар уртаса биш йылға оҙағыраҡ йәшәй. Дөйөм алғанда, зоотерапия бөгөн күп кешеләргә сәләмәтлеген нығытырға булышлыҡ итә. Белгестәр әйтеүенсә, бесәй ауыртҡан урынды үҙе табып дауалау һәләтенә лә эйә.

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

**Баймаҡ районында тағы ла "Йолаларыбыҙ - алтын ҡомартҡыбыҙ" эстафета-конкурсы старт алды. Үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре директоры Луиза Дәүләтшина әйтеүенсә, был сараның маҡсаты - башҡорт халҡының быуындан-быуынға, телдән-телгә изге аманат итеп тапшырыла барған әхлаҡи, хоҡуҡи кодекстарын, мәғрифәти тәғлимәтен һаҡлау һәм ата-бабаларыбыҙҙың тормошҡа, тәрбиәгә фәлсәфәүи фекерҙәрен киләсәк быуынға еткереү. Рухи ҡомартҡыбыҙ булған йолаларҙы халҡыбыҙҙың көнкүрешенә индереү, һәр ауылға хас булған йолаларҙы асыҡлау һәм тергеҙеү, бер ҡорға туплау. Эстафета-конкурс марттан декабрь айына тиклем дауам итәсәк. Программаға ярашлы, һәр ауыл биләмәһе халҡыбыҙҙың матур бер йолаһын әҙерләп, эстафета тапшырырға килгән ҡунаҡтарға күрһәтә. Был сара театрлаштырылған тамаша булып ҡына түгел, ә ысынбарлыҡта атҡарыла - сараның бер талабы ошо.**

# ХАЛҠЫБЫҘ ЙОЛАЛАРЫН...

## дөрөҫ итеп атҡарайыҡ!



Эстафета-конкурс районыбыҙҙың иң бай тарихлы Темәс ауылынан башланды. Абруйлы кешеләрҙән торған баһалама комиссияһына Темәс ауыл биләмәһе ағинәйҙәре "Кис ултырыу" йолаһын күрһәтте. Һәр хужабикә үҙенең ҡул эштәре менән килгәйне. Шулай итеп, беҙ балаҫ һуғыу, таҫтамал, яҫтыҡ, алъяпҡыстар сигеү, зауыҡлы һәм модалы кейемдәр, шәл, селтәр, келәм бәйләү, быйма баҫыу кеүек эштәрҙең шаһиты булдыҡ. Унан һуң урындыҡҡа йәйелгән ашъяулыҡҡа милли аш-һыуҙарыбыҙ теҙелде: еләк ҡағы, ыуыҙ һөтөнән ҡойолған ҡоймаҡ, баллы сәк-сәк, бауырһаҡтар, ҡыҙыл эремсек, ҡаймаҡ, ҡорот, талҡан телде йоторлоҡ ине. Унған ханымдар шифалы буҙа эсемлеген әҙерләү серҙәрен дә өйрәтте. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының уңғанлығын да, йыр-бейеүгә оҫталығын да күрһәткән Миңһылыу Әхмәрова, Яңылбикә Ғарифуллина, Гөлнара Ҡотлоғәлләмова, Миңзифа Йосопова, Мәрйәм Байраҡаева, Фәүзиә Әбсәләмова, Венера Бикбирҙина, Гөлшат Йосопова, Әлмира Исхаҡова, Хәлимә Рәсүлева, Зифа Санъярова, Йәмилә Әбүталипова, Гөлдәр Имелбаева, Гөлшат Лоҡманова, Лилиә Ишбаева хаҡлы рәүештә тамашасыларҙың алҡыштарына күмелде.

"Йолаларыбыҙ-алтын ҡомартҡыбыҙ" эстафета-конкурсын ҡабул итеп, Ҡолсора ауыл биләмәһе ағинәйҙәре Түбәнге Иҙрис ауылында бәпескә исем ҡушыу йолаһы атҡарҙы. Байрам иң уңған, өлгөлө ғаиләләрҙең береһе булып һаналған, яңыраҡ ҡына сабый ауазы яңғыраған Зәлиә һәм Илсур Сафиуллиндар йортонда үтте. Түбәнге Иҙрис ауылын йәмләп донъяға килгән сабыйҙың оло олатаһы Нуритдин ағай һәм оло өләсәһе Фәриҙә еңгәйҙең бергә йәшәүҙәренә 50 йыл була. Нуритдин ағайҙың улдары Тәлғәт, Йәү-

ҠЫҘ-ҠАТЫН ҠОЛАҒЫНА

# ЙӘШЕЛ ҠӘҺҮӘ ЯБЫҠТЫРАМЫ?



**Һәр ҡатын-ҡыҙ һығылып торған нескә билле, һомғол буйһынлы булырға хыяллана. Теләктәрен тормошҡа ашырыу ниәтендә үҙҙәрен кәрәкле формаға килтерергә ынтылыусы гүзәл заттарыбыҙ ябығыу өсөн ниҙәр генә эшләмәй! Хатта спорт менән шөғөлләнә башлауҙан тыш, бихисап төр диеталар, айырым туҡланыу, ябығыу өсөн махсус дарыуҙар, техник аппараттар ҡулланыуға тиклем барып етәләр. Күптәр уларҙың матурлыҡҡа ынтылышын отошло бизнесҡа әүерелдерә. Бындай ҙур килем килтереүсе ябыҡтырыу ысулдары араһында һуңғы йылдарҙа киң танылыу алған йәшел ҡәһүә лә бар. Уның тураһында тупланған мәғлүмәттәрҙе һеҙҙең иғтибарға ла тәҡдим итмәксе булдыҡ.**

Күп кенә таныштарым ауыҙ һыуы ҡоротоп һөйләгән йәшел ҡәһүә тигән ябыҡтырыу сараһы тураһында ишетә йөрөй торғас, түҙмәнем, уның тураһында интернет селтәрендә ниндәй мәғлүмәт биреүҙәрен инеп уҡыным. Баҡтиһәң, һатыуға сығарыр алдынан ҡәһүәне ҡыҙҙыралар икән, шул осраҡта ғына ул беҙ күреп өйрәнгән һоро төҫкә инә, төрлө файҙалы матдәләре сығып бөтөп, составында кофеин ғына ҡала. Ә бөтә ҡатын-ҡыҙҙар зыу килеп дарыуханаларҙан, интернет-магазиндарҙан, тағы әллә ниндәй таныштары аша алдырып эскән йәшел ҡәһүә кеше организмына күпкә файҙалыраҡ килеп сыға, имеш. Мәҫәлән, белгестәр иҫәпләүенсә, йәшел ҡәһүәләге хлороген кислотаһы йөрәк-ҡан тамыры сирҙәрен, шәкәр ауырыуын иҫкәртергә, ябығырға ярҙам итә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың "йәшел ҡәһүә сире" ҡасан башлана һуң? Баҡтиһәң, уныңданы бөтөн донъяға 2012 йылда Америка табибы, йөрәк хирургы Mehmet Cengiz Oz үҙенең "Доктор Оз шоу" тип аталған популяр тапшырыуында һөйләгәс тарала. Доктор Оз әйтеүенсә, махсус туҡланыу, физик күнекмәләр эшләмәгән осраҡта ла тиҙ арала артыҡ килограмдарҙан арынырға ярҙам иткән был ысул ҡышҡы кейемдәрҙе сисеп ташлар алдынан һәр ваҡыт ябығырға теләп торған гүзәл заттар тарафынан йәһәт кенә күтәреп тә алына. Етмәһә, тапшырыу сыҡҡас күп тә тормай, ғалимдар һимереүҙән яфаланыусы 16 кешенән торған төркөм туплап, йәшел ҡәһүәнең ябыҡтырыу көсөн 12 аҙна дауамында тикшереп ҡараған. Һөҙөмтәлә, ҡатнашыусылар уртаса 8 кг-ға тиклем ябыҡҡан. Был хәбәр интернет селтәре аша таратыла, тиҙ арала һатыусылары ла табыла, "яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеүселәрҙең" фекерҙәре, баһалары килеп сыға. Уларса, йәшел ҡәһүә эскән осраҡта, аҙ ашай башларға ла, физик күнекмәләр яһарға ла кәрәкмәй, көнөнә бер-ике тапҡыр ошо эсемлекте эсеү мотлаҡ. Әммә улар йәшел ҡәһүәнең составында ла кофеин матдәһе булыуы тураһында бер һүҙ ҙә яҙмай. Әйтергә кәрәк, ундағы кофеин ҡыҙҙырылған ҡәһүәгә ҡарағанда күпкә әҙерәк. Ләкин шул ғына өлөшө лә нервыларҙы ҡуҙғытыу, күңелде болғандырыу, хәүеф тойғоһон көсәйтеү, йоҡоһоҙлоҡ, йөрәк тибешен йышайтыу өсөн етерлек. Шулай уҡ, йәшел ҡәһүәне күп ҡулланыу баш ауырыуына, ҡолаҡ шаулауына, эс китеүгә, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарына, ҡан баҫымы ныҡ күтәрелеүгә килтереүе мөмкин. Кофеин матдәһе организмдағы кальцийҙы "йыуып сығара", был үҙ сиратында һөйәктәрҙе насарайта икән. Белгестәр йәшел ҡәһүә менән артыҡ мауыҡмаҫҡа, уны ябығыу өсөн күрелгән башҡа саралар менән бергә, ярҙам өсөн генә ҡулланырға тәҡдим итә. Көнөнә бер-ике тапҡырҙан да артыҡ эсергә ярамай, тигән фекерҙә улар. Йәшел ҡәһүә менән артыҡ мауығып, һаулыҡҡа ғына түгел, кеҫә төбөнә лә зыян килтерергә мөмкин - сифатлыһы бик ҡиммәт тора.

Интернет селтәрендә, һәр ваҡыттағыса, фекерҙәр төрлө, күп. Улар араһынла йәшел ҡәһүәне һауаға күтәреп маҡтаған, бөтөнләй насарлап ташлағандары ла бар. Әммә нимә тип яҙһалар ҙа, йәшел ҡәһүә эсеп ябығырға теләүсе таныштарым араһында һиҙелерлек уңыш ҡаҙаныусыларҙы күргәнем юҡ әлегә. Шулай ҙа йәшел ҡәһүә ярҙамына мөрәжәғәт итһәгеҙ, һәр нәмәлә алтын урталыҡ кәрәк булыуын онотмағыҙ, сәләмәт булығыҙ!

***✓ Өләсәй сабыйға изге теләктәрен теләп, маңлайына ҡором һөрттө, ҡулына еп бәйләне. Артабан сабыйға "шайтан" күлдәге кейҙерелде. Ен-шайтан был күлдәктең матурлығына, сағыулығына ҡыҙығып, балаға зыян ҡылырға онота икән.***

ҙәт, Рөстәм дә колхоздың алдынғы малсылары булды, ә ҡыҙҙары, әсәһе кеүек, икмәк бешереү оҫталары. Һәр береһе ҙур, матур йорттар һалып, үҙ аллы донъя көтә, бөтәһе лә күп балалы ғаиләләр. Килендәре лә, "Ир - баш, ҡатын - муйын" мәҡәленә таянып, бер-береһе менән кәңәшләшеп, ирҙәренә ихтирам күрһәтеп, татыу ғүмер итә.

Ҡолсора ауыл биләмәһе ағинәйҙәре әйтеүенсә, уларҙың төбәгендә никахлашыу, бәпескә исем ҡушыу, туй йолаларыяусылау, бата уҡытыу, йыртыш, саҡырыусы ебәреү, ҡот алып ҡасыу, ҡыҙыл туй асыу, сыбыртҡы ите, килен һөйөү, һыу башлау, килен сәйе кеүек боронғо йолаларҙың барыһы ла эҙмә-эҙлекле башҡарыла. Бик борондан яңы тыуған сабыйҙы ҙурлап, хөрмәтләп ҡаршы алғандар, уға изге теләктәр теләп, төрлө йолалар башҡарғандар. Балаға бирелгән исем аша уның есеме билдәләнгән. Сабыйға бәхет, ырыҫ, байлыҡ, матурлыҡ, оҙон ғүмер теләнгән, уға ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, үткерлек сифаттары бирергә тырышҡандар. Сафиуллиндар ғаиләһенә йыйылған ҡунаҡтар урынлашып бөткәс, бәпескә исем ҡушыу байрамы башланды. Өләсәй кеше:

*- Ергә һалдым - ер алмай,*
*Күккә сөйҙөм - ҡош алмай,*
*Эткә һалдым - эт алмай,*
*Бала һатам - кем ала? -*

тигәс, сабыйҙың атаһы:

*- Бала һатһаң, мин алам,*
*Ниməһе менән һатаң? -*

тип һораны. Өләсәй:

*- Ғүмере менән һатам,*
*Бәхете менән һатам,*
*Тәүфиғы менән һатам, -*

тигәс, атаһы:

*- Бала һатһаң, миңә һат,*
*Ғүмере менән бергә һат,*
*Бәхете менән бергә һат,*
*Тәүфиғы менән бергә һат.*
*Түләүенә тун бирәм,*
*Уға ҡушып мал бирәм, -*

тине.

Артабан өләсәй баланы атаһына, атай кеше сабыйҙы әсәһенә бирҙе. Әсәһе: "Атаһы, балаға исем ҡуштырырға кәрәк, исем һорап илай бит", - тигәс, ғаилә башлығы: "Эйе шул, мин хәҙер мулланы, ҡунаҡтарҙы алып киләйем", - тине. Йортҡа мулла, оло йәштәге инәйҙәр килеп инде. Әбейҙәр бәпес янына буш ҡул менән килмәгәйне. Улар алып килгән күстәнәстәрен һамаҡлап бирҙе:

*Икмәкле-тоҙло, уллы-ҡыҙлы,*
*Бәхетле-тәүфиҡлы,*
*Тәмле телле булһын.*
*Һүҙҙәрең өҫтөн,*
*Йөҙҙәрең күркәм,*
*Ҡулдарың эшсән булһын.*
*Бәхетле-тәүфиҡлы бул,*
*Балдай татлы телле бул.*
*Түрең майҙай йомшаҡ булһын.*
*Атаңа шәфҡәтле бул,*
*Әсәңә рәхмәтле бул,*
*Матур күңелле бул.*
*Үҙеңдән олоға, ағай, тиң,*
*Атаңдан олоға, олатай, тиң,*
*Әсәңдән олоға, инәй, тиң,*
*Инәңдән олоға, өләсәй, тиң.*
*Алты ағзаң теүәл булһын,*
*Аҡылың камил булһын,*
*Изге бала бул,*
*Мөхәммәт өммәтенән бул.*

Артабан ағинәй: "Ҡашың ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйғас булһын, үҙең аҡ уйлы бул!"- тип, көмөш тәңкә менән сабыйҙың ҡаштарын һыҙҙы. Мулла изге аяттарын бағышлап, бәпескә ата-әсәһе һайлаған Илнара тигән исемде ҡушты. Илнара- ғәрәп һәм фарсы теленән алынған исем, халыҡтың танылған кешеһе, илен нурға, гөл-баҡсаға күмеүсе, тигәнде аңлата икән.

Өләсәй сабыйға изге теләктәрен теләп, маңлайына ҡором һөрттө, ҡулына еп бәйләне. Артабан сабыйға эт (шайтан) күлдәге кейҙерелде. Ен-шайтан был күлдәктең матурлығына, сағыулығына ҡыҙығып, балаға зыян ҡылырға онота икән. Шул саҡ тыштан балалар йүгереп килеп инде лә, өҫтәлдәге ҡоймаҡҡа ынтылды. Өләсәһе уларҙың ҡулдарына һуҡҡас, малайҙар илаған булды. Был үҙе лә бер ырым икән. Күҙгә күренмәгән енпәрейҙәр балаларҙың ҡысҡырғанын ишетә лә, быларға һуҡҡан кеүек, беҙҙе лә һуғыр, тип, сәңгелдәккә яҡын килмәйҙәр, имеш.

Артабан өләсәй бәпәй ебен таратты. Шулай уҡ малайҙарға - тәңкә, ҡыҙҙарға мәрйен бүләк итте. Байрамға йыйылғандар:

*Өләсәй бәпәй ебен тарата,*
*Ғүмере ошо ептәй оҙон булһын,*
*Туғанлыҡ ебе ныҡ булһын,*
*Ата-әсәһенә изгелекле-игелекле булһын,* - тип һамаҡланы.

Сабыйға исем ҡушҡандан һуң әҙерләнгән табын еп сәйе йәки еп туйы тип атала. Өҫтәл төрлө-төрлө милли ризыҡтан, тәмлекәстәрҙән һығылып тора. Өлкәндәр изге теләктәрен әйтеп, бала тәрбиәләү буйынса кәңәштәрен биреп, ата-әсәгә өгөт-нәсихәттәрен еткереп, ашыҡмай сәй эсте. Сабыйға исем ҡушыу байрамынан онотолмаҫ тәьҫораттар алған ҡыҙҙар, малайҙар, һыйланып алғас, урамға уйнарға йүгерҙе. Был саранан һәр кем күңел күтәренкелеге алды, уны оҫта итеп ойоштороған Сафиуллиндар ғаиләһенә, китапханасылар Гүзәл Рахманғолова һәм Гүзәл Мөхәмәтҡужинаға ҙур рәхмәттәрен еткерҙе.

Эйе, халҡыбыҙ йолалары - милләтебеҙҙең гүзәл рухи хазинаһы ул. Уларға ныҡлы иғтибар биреү һәм һәр йоланы дөрөҫ атҡарыу, аңлау мөһим. Юғиһә, һуңғы йылдарҙа, мәҫәлән, киленгә һыу юлын күрһәтеү төрлө кейемгә төрөнгән иҫеректәрҙең шайтан туйына әүерелә башланы. Ә бит элек-электән йәш киленсәк таң менән көйәнтәләп һыуға барып, уның бер тамсыһын да сайпылтмай алып ҡайтып, яңы тормошона фатиха һораған. Шундай булған ысын йола. Бәпес алып ҡайтыу, уға исем ҡушыу, сөннәткә ултыртыу йолалары ла йә юҡҡа сыға, йә иһә бөтөнләй милләтебеҙ өсөн ят, ҡайһы саҡта имәнес төҫ ала бара. Шуға күрә, районыбыҙҙа гөрләп башланған эстафета-конкурс күңелдәрҙе үҫтергән, дәртләндергән йолаға әүерелеп, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе тергеҙергә һәм үҫтерергә ярҙам итер, тигән ышаныстабыҙ.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БЕР-БЕРЕБЕҘҘЕ ХӨРМӘТ ИТӘЙЕК!

**Ер шары Әҙәм унда төшөрөлөп, тормош башланғандан алып, низағтар тотҡонлоғонан сыға алмай. Кеше уйламаған ерҙә проблемалар тыуҙыра, күҙ алдына килтереп булмаған урында һуғышҡа сәбәптәр булдырып, ҡоралға йәбешә. Әҙәмдең бер улы икенсеһен үлтергән кеүек, кешелек ғүмеренең һәр өлөшөндә ҡан ҡәрҙәшендә дошман таба. Сөнки ҡан ҡәрҙәшлек һәр саҡта ла ҡараштар, ҡиммәттәр ҡәрҙәшлеген аңлатмай әле.**

Кешеләргә бер-береһен аңлау етмәй. Кешеләр бер-береһен тыңлап, бер-береһен ишетеү һәләтен юғалтҡан, ахыры. Шул сәбәпле аңлашмаусанлыҡтар килеп сыға һәм оло бәләләргә килтерә. Эйе, әҙәм балаһын Аллаһы Тәғәләнең иң камил заты булараҡ хөрмәт итеү, уға мөхәббәт һәм мәрхәмәт аша ҡарау - Аллаһы Тәғәләнең үҙен дә хөрмәт итеүебеҙ ул. Ә ҡараштары буйынса беҙгә яҡын булған кешеләрҙе генә яратыу - ул шовинизмға яҡын индивидуализм, үҙеңдең шәхес культыңды күтәреү, ихласлыҡтан ваз кисеү. Етмәһә, башҡа ҡараштағы булған кешеләргә ҡарата тәкәббер ҡараш - мин-минлек һәм шөһрәт яратыусанлыҡ билдәһе.

Кешелектә ябай булмаған киләсәк көтә, шуға ла әҙәм балалары бик һаҡ һәм уяу булырға тейеш. Оҙаҡ ваҡыт кеше үҙе теләгәндә генә ысынбарлыҡ итеп күрергә тырышты. Ул үҙе инанған хәҡиҡәт менән генә хушһынып, башҡаларҙың инаныуҙарын инҡар итте, уларҙың ҡараштарын хупламайынса, үҙенең бәләкәй генә дөрөҫлөгө артынан эйәрҙе. Үҙ ҡарашын ғына дөрөҫ итеү күп осраҡта башҡаларҙы ғәйепләү, уларға яла яғыу, дошманлашыу менән тамамлана ине һәм ҡайһы берҙә физик көс ҡулланыуға тиклем барып етте. Ошондай хаталар арҡаһында ҡот осҡос хәлгә тарыныҡ: донъяның тиҫтәләгән урынында һуғыштар бара, тағы ла тиҫтәләгән илдәрҙә үлтерештәр даими күренешкә әүерелде, этноцидтар геноцидтар менән тамамланды. Быуаттар буйы иңгә-иң терәп, бергә йәшәгән кешеләр бөгөн ҡан дошмандарға әйләнде. Айырым төркөмдәрҙең шәһүәттәре, уларҙың дөйөм ҡиммәттәргә төкөрөп ҡарауы арҡаһында хәҡиҡәт менән ялған араһында сиктәр юйылды. Ошо шарттарҙа уртаҡ фекергә килергә, килешергә мөмкин микән?

